✓Дуҫтарың араһындағы түгел, дошмандарың араһындағы бәхәсте хәл ит. Дуҫтарың араһына ҡыҫылһаң, бер дуҫың дошманға әйләнәсәк. Ә дошмандарыңдың бәхәсенә ҡыҫылһаң, бер дошманың дуҫыңа әйләнер.

(Биант, боронғо аҡыл эйәһе).

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

Киске Өфө

29 МАЙ - 4 ИЮНЬ
(ҺАБАНАЙ - ҺӨТАЙ)
2010 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru | 2002 йылдан башлап сыға | Һатыуҙа хаҡы ирекле | №22 (388)

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Һуңғы ҡыңғырау сыңланы:
яңы тормош башлай йәш кеше

4

Хәләл ризыҡ әҙерләү...
Диниә назараты күҙәтеүе аҫтында

5

Милләт идеяһыҙ йәшәй алмай,

тик ул идея әхлаҡлы булһын
8-9

Нәфрәт, алйотлоҡ, үлем. Мөхәббәткә урын бармы?

Ошо һорауға Вильям Шекспир һәм режиссер Илнур Муллабаев яуап бирҙе

11

14 ТВ-программа

ЙӘН ӘРНЕУЕ

ҠЫҘҘАРЫҒЫҘ АРТЫҠМЫ НИ, ӘСӘЙҘӘР?

Һуңғы йылдарҙа сит илдәргә сығыу шарттары еңелләшкәс, өҫтәүенә, сит ил юғары уҡыу йорттарында белем алыу мөмкинлеге тыуғас, йәштәребеҙ ил ҡапҡаларын еңел генә асып сыға башланы. Бик хуп. Әйҙә, телдәр өйрән, һөнәр ал, аҡыл тупла. Шунан тыуған төйәгеңә ҡайт та, халҡыңа хеҙмәт ит. Ундайҙар ҙа бар. Әммә Беннет, Албано, Кемельташ һәм башҡа шундай фамилиялы ҡыҙҙарыбыҙ бихисап булып китте бит хәҙер.

Ҡыҙҙарҙамы ғәйеп? Эйе, мөхәббәт, тип һаташа инде ул йәштәр. Әммә, минеңсә, төп ғәйеп барыбер ҙә әсәйҙәрҙә. Тәүҙән үк бала күңеленә илһөйәрлек тойғоһо һалмауҙан, сит милләткә кейәүгә сығыуҙың мәртәбә түгел, ә ил, атай-әсәй алдында яуаплылыҡ тоймау икәнлеген аңлатмауҙан килә был хәл... Исемдәрен үҙгәртеп, ишеткән-күргән күңелһеҙ ваҡиғалар тураһында бәйән итмәксемен. Бәлки, унауҙан берәү булһа ла аҡылына килеп, үтә лә яңылыш, үтә лә әсенеүле, үкенесле аҙым яһауҙан балаһын ҡурсалап алып ҡалыр.

...Сит ил кешеһенә бынан ҡырҡ йылдар элек кейәүгә сыҡҡан башҡорт ҡатыны менән телефондан һөйләштем. "Ирем үлде. Туғандар менән аралашыу ғәҙәте бында юҡ. Ике балам да ауырыу. Йәшәү ауыр. Исмаһам, сығып һөйләшеп ултырыр, кәрәк саҡта йомош алып торор кеше лә юҡ. Мин күптән инде кеше булыуҙан туҡтағанмын. Тере мәйетмен. Ир, тип, ил ташламағыҙ, тип, күк йөҙөнә яҙып ҡуяйыммы? Һәр кем үҙ илендә, үҙ ерендә, үҙ милләте менән, туғандары менән йәшәһен ул. Йәш саҡта нисек тә үтте. Иремдең ата-әсәһе лә арыу булды. Ирем дә яратты. Хәҙергеһе ҡыйын. Ташлап ҡына ҡайтып китер инем, балаларымды ни эшләтәйем? Уларҙы ла үҙем кеүек тыуған илдәренән ситтә зарыҡтырайыммы? Тотош ғүмерем төндән генә тора хәҙер, ҡара төндән..."

...Ҡыҙым Төркиәгә кейәүгә сыҡты. Бер йылдан балаһы тыуҙы. "Әсәй, һине тыңламаным, ғәфү ит. Тик килеп ал мине, тамуҡта ҡалдырма", - тигәс, киттем. Кейәү кешенең ҡатыны булған икән, тик бала тапмаған. Минең ҡыҙымды хеҙмәтсе урынына тотҡандар. Ауырыуға һабышҡан. Саҡ алып ҡайттым. Айырыуы бер бәлә булһа, баланы алыуы мең бәлә булды. Унда балалар атайҙары менән ҡалырға тейеш икән. Әлдә бала имгән сағында аҡыл етеп барҙым. Унда күргән михнәттәрҙән үҙем ауырып киттем. Төркиәлә ҡыҙҙар өсөн бик ҙур ҡалым һорайҙар. Беҙҙең яҡтан барғандар өсөн ҡалым кәрәкмәй. Арзандар. Аҙаҡ баһалары ла шулай арзан ғына була. Уларға бик түбәнһетеп ҡарайҙар. Беҙҙең ҡыҙҙар һыр бирмәй маташҡан булалар инде..."

...Яңыраҡ бер танышыбыҙ фани донъя менән хушлашты. Америкалағы улы менән ҡыҙы атай ҡәберенә бер ус тупраҡ һалырға, ҡара ҡайғыға ҡалған әсәйҙең күңелен йыуатырға ла ҡайта алманы...

Әсәйҙәр, ете диңгеҙ аръяҡтарына олаҡтырырға ҡыҙҙарығыҙ артыҡмы неҙең? "Ҡәйнәм, ҡайным", - тип өҫтәлә-неп торған кейәүегеҙгә кейәү ҡоймаҡтары бешереп көтөп алыуҙы, "өләсәй, ҡәрсәй" тип муйыныҡыҙҙан ҡосоп алыр ейән-ейәнсәрҙәрегеҙҙең һәр саҡ яныҡыҙҙа булыуын теләмәйһегеҙме ни?

Күкрәк һөтөгөҙҙө имеҙгәндә, төн йоҡоларын ҡалдырып сәңгелдәк бәүеткәндә ниндәй теләктәр теләйһегеҙ һуң һеҙ, изге әсәләр? Кемдәр өсөн табаһығыҙ ҙа, кемдәр өсөн бағып үҫтерәһегеҙ ғәзиз ҡыҙҙарығыҙҙы?!

Мәрйәм БУРАҠАЕВА.

БАШҠОРТ ДОНЪЯҺЫ

Ҡәҙим АРАЛБАЙ

БАШҠОРТ ҠОРОЛТАЙЫНА

**Сәсәндәр ораны донъяны ураһын,
Ҡурайҙар тупланыу көйҙәрен уйнаһын,
Ҡоролтай турында бар ғаләм тыңлаһын,
Башҡортта азатлыҡ тойғоһо уянһын!**

**Ҡоролтай - ҡоро дау, лаф ороу булмаһын,
Конгресс - ҡаңғырыш, ҡан ҡойош булмаһын,
Башҡортта боронғо олпатлыҡ уянһын,
Ғорурлыҡ, ҙәллыҡ тойғоһо тулаһын!**

**Был быуат ҡояшы байыуға барғанда,
Низағтар хәл итеш атышҡа ҡалғанда,
Күп милләт яҙмышын ҡулына алғанда,
Башҡортом ымһынып ҡалмаҫ ул ялғанға.**

**Ҡоролтай - гел байрам, уйын-йыр түгел дә,
Тормоштар шәплектән уйнаҡлау түгел дә;
Был йыйын - иреккә һыуһаған күңелдәр,
Ул - халҡым өмөтө сыраҡһыҙ төнөндә.**

**Ут йотҡан, яу кискән, бөлөнгән башҡортом,
Тарҡалған күстәрҙе туплаған Баш ҡортом,
Ҡоролтай саҡыра: ҡайтып бер баш ор, тип,
Ҡурсалар атайсал - Уралың, баш йортоң.**

**Сәсәндәр ораны донъяны ураһын,
Ҡурайҙар тупланыу көйҙәрен уйнаһын,
Ҡоролтай саң ҡаға - бар ғаләм тыңлаһын,
Башҡортта берҙәмлек тойғоһо уянһын!**



✓ *Яңы ергә күсеп килеп, иң тәүҙә ҡайҙа спорт залы, ҡайҙа бокс түңәрәге, тип ҡыҙыҡһыналар. Ә беҙҙең егеттәр ауылдан килһә, яҡташтарын табып, ҡайҙа ултырып һыра эсергә була икән, тип эҙләй башлайҙар.*

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

КЕФИР МЕНӘН КЕҮӘҪТЕ... ҡасан эсергә?

Үткән аҙнала РФ Дәүләт Думаһы депутаттары руль артына ултырыр алдынан эсеүҙе тулыһынса тыя торған закон проектын тәүге уҡыуҙа ҡабул итте. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ: әлеге ваҡытта ҡанда этил спирты тупланмаһы 0,3 промилле (литрына 3 грамлап) һәм өрөп сығарылған һауала 0,15 промилле күләмендә булыуы асыҡланған хәлдә лә ГАИ хеҙмәткәрҙәре бәйләнә алмай ине.

"Коро" закон проекты Дәүләт Думаһы ҡарарына дәүләт башлығы тарафынан индерелде. Дмитрий Медведев былтырғы әңгәмәләрҙең береһендә рәсәйлеләргә руль артында айыҡлыҡ режимын һаҡлауға менталитет ҡамасаулыҡ итеүе хаҡында һүҙ алып барғайны. "Беҙҙекеләрҙең нисек эскәне бөтәбеҙгә лә мәғлүм бит, - тигәйне ул. - Тәүҙә бер рюмка, шунан - икәү, өсәү, ә аҙаҡ машинаһына ултыра ла сығып китә..".

Депутаттар РФ Президенты башланғысын бер тауыштан хуплап ҡаршы алды. Дөрөҫ, был тәңгәлдә тағы бер проблема килеп сыҡҡан: ә рулгә ултырырҙан алда кеше кефир йә кеүәҫ эскән булһа, ни эшләргә? Был зыянһыҙ эсемлектәрҙә лә аҙ ғына күләмдә булһа ла алкоголь дозаһы бар! Хәҙер нимә, кефир эскәнһең икән, рулгә тотонма буламы?

-Икенсе уҡыуҙа беҙ закон проекты өҫтөндә артабан эшләйәсәкбеҙ әле, - тип һөйләй Думаның Һаулыҡ һаҡлау комитеты ағзаһы Татьяна Яковлева. - ГАИ хеҙмәткәре туҡтатһа, автоһөүәҫкәрҙең алкотестер менән тикшерелеүҙән баш тартып, махсус медицина учреждениеһына барып тикшерелеүгә хоҡуғы булырға тейеш. Сөнки 50 грамм ғына араҡы эсеүҙең дә иҫереүгә һәм хәрәкәт координацияһы боҙолоуға килтереүе ихтимал, ләкин быны фәҡәт белгес тикшерергә тейеш. Ә инде спиртлы дарыуҙар (үлән төнәтмәләре) йәки әлеге лә баяғы кеүәҫ эсәһең икән, уның билдәләре беленмәйәсәк. Йәғни был осраҡта кешене алкоголь ҡулланған, тип әйтеп булмай. Ә шулай ҙа автоһөүәҫкәрҙәргә машинаға ултырырға бер сәғәттән алда кеүәҫ эсмәҫкә кәңәш бирергә була. Ә кефирҙы иһә төнгөлөккә эсеү файҙалыраҡ.

СИПАЙЛОВО БАҘАРЫНЫҢ... көндәре һанаулы

Сипайлово баҙарының аренда килешеүе ваҡыты тамамланған һәм ул башҡаса оҙайтылмаясаҡ икән. Ҡала етәкселәре эшҡыуарҙарға 31 майға тиклем тауарҙарын һатып бөтөргә ҡушҡан. "Хәҙер Өфөлә сауҙа итеүселәрҙе мөлкәттәре менән бушлай күсереп, ташламалы аренда тәҡдим итеүсе бер нисә баҙар бар: Төньяҡ, Заречный, Алтын балыҡ, Колхоз һәм Лопатин баҙарҙары Сипайлово эшҡыуарҙарын ҡабул итергә әҙер. Һатыусылар ошондай уҡ асыҡ майҙандарҙа, шундай уҡ аренда хаҡы түләп сауҙа эштәрен дауам итә ала", - ти ҡала округы хакимиәтенең ҡулланыу баҙары начальнигы Ирина Рублева.

УЙЛАН, ЕГЕТ...

ҮҘЕҢДЕ ЯҠЛАЙ АЛАҺЫҢМЫ?

Спорт милләтте күтәрә аламы? Ошо һорауҙы күтәреп, фекер алышырға саҡырыу булғас, мин дә, 20 йыл спорт менән шөғөлләнеүсе буларaҡ, уйлағандарымды әйтеп китергә булдым.

Әлбиттә, фекер хаҡ: спорт сәләмәтлекте нығыта, үҫмерҙәрҙе һыра эсеү, тәмәке тартыуҙан аралай. Шулай уҡ, Салауат Юлаев хоккей клубы Башҡортостан данын күтәрә, тигән дәлилгә лә ҡаршы килеп булмай. Тик, әйҙәгеҙ, дөрөҫлөккә тура ҡарайыҡ: һуңғы арала ҡайһы бер егеттәребеҙгә етеңкерәмәй башлаған рух нығлығын, батырлыҡты бирә аламы спорт уйындары? Әлбиттә, юҡ, сөнки һиңә туп тейеү ҡурҡынысы янағандан ғына батыр рухлы булып китеп булмай.

Спорт уйындары мауығтырғыс, әлбиттә, әммә беҙ башҡорт ир-егетенең беренсе сиратта яугир, батыр, олпат булырға тейеш икәнен онотмаҫҡа тейешбеҙ. Сөнки әлеге заманда беҙ идеаль йәмғиәттә йәшәмәйбеҙ һәм мөнәсәбәттәрҙе көс ҡулланыу ярҙамында асыҡлау тарихта тороп ҡалмаған. Шуға күрә, физик баҫым янауы аҫтында ҡалған осраҡта егеттәребеҙ милләт исеменә тап төшөрмәҫтәй итеп яуап бирә алырға тейеш, бигерәк тә үҙ еребеҙҙә. Был маҡсатҡа спорт уйындары йәки йүгереү, саңғыла йөрөү генә ярҙам итә алмай. Минеңсә, һәр ир-егет спорт төрөн һайлағанда ошонан сығып фекер йөрөтөргә тейеш һәм ниндәй ҙә булһа көрәш, алыш төрҙәренән тыш, бик булмаһа, олпат кәүҙә биреүсе ауырлыҡтар күтәреү буйынса спорт төрөн һайларға тейеш.

Миҫал өсөн әлеге лә баяғы Ҡаф тауы егеттәрен алып ҡарайыҡ. Улар бит бәләкәйҙән көрәш, йә берәй көнсығыш алыш төрө менән шөғөлләнә. Яңы ергә күсеп киләләр икән, иң тәүҙә ҡайҙа спорт залы, ҡайҙа бокс түңәрәгенә йөрөргә була, тип ҡыҙыҡһыналар. Ә беҙҙең егеттәр ауылдан килһә, яҡташтарын табып, ҡайҙа ултырып һыра эсергә була икән, тип эҙләй башлайҙар.

Башҡорт йәштәре иттифағының "Урал батыр вариҫтары" тигән яңғырауыҡлы исем менән волейбол турниры, "Яугир" атамаһы менән йәштәр көнөндә тоҡ һуғышы ойошторoуы (ә башта был исем аҫтында ошо юлдар авторы тарафынан ҡул һуғышы турниры үткәрелгәйне) бик үк дөрөҫ, матур күренеш түгел, тип уйлайым. Ундай яңғырауыҡлы атамаларға сараның эстәлеге лә тура килергә, атаманың бәҫен төшөрмәҫкә тейеш бит.

Егеттәрҙе етдиерәк спорт төрҙәренә ылыҡтырыу фарыз. Мәктәптәрҙә, мәҫәлән, урта һәм өлкән синыфтарҙағы физик тәрбиә дәрестәрен (егеттәр өсөн) бокс йәки кикбоксинг, көрәш, самбо кеүек күнекмәләр рәүешендә үткәреп, ваҡыты-ваҡыты менән дөйөм физик тәрбиә нормативтары тапшырылып барғанда, күпкә ҡыҙыҡлыраҡ һәм файҙалыраҡ (егеттәребеҙҙе тормошҡа, армияға әҙерләүҙә) булыр ине, тим.

Борон һәр башҡорт яугир булғанын иҫтә тотоп, егеттәребеҙҙе көрәш, көсҡеүәт, олпат ҡиәфәт биреүсе герштанга күтәреү менән мотлаҡ шөғөлләнергә саҡырыр инем. Сөнки физик көс ҡулланыуға барып етеп, үҙенә генә таянырға тура килһә, һин милицияла эшләйһеңме, фән эшмәкәреме, йырсымы, зәһәр футболсымы - вазифаң һиңә бер нисек тә ярҙам итә алмаясаҡ, уйланығыҙ...

Рушан ХӘСӘНОВ,
кикбоксинг буйынса тренер.

ИҒТИБАР!

ХӨРМӘТЛЕ УҚЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

Стәрлетамаҡ ҡалаһының башҡорт теле уҡытыусылары.

2010 йылдың икенсе ярты йыллығы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып ҡалығыҙ, тип саҡырабыҙ һеҙҙе. Яңы хаҡтарҙы иғлан итәбеҙ: 50665 индекслы "Киске Өфө" алты айға 318 һум 24 тин, 50673 индекслыһы (предприятие һәм ойошмалар өсөн) 354 һум 24 тин тора.

Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Өфөлә "Газ. Нефть. Технологиялар -2010" халыҡ-ара күргәҙмәһе эшләй. Ун һигеҙенсе тапҡыр ойоштороlған был абруйлы сарала Рәсәйҙең 68 ҡалаһынан, күп кенә сит илдәрҙән килтерелгән 330-ҙан ашыу экспонент ҡатнашты. Иң ҙур экспозиция - 100-ҙән ашыу предприятие продукцияһы ҡуйылған күргәҙмә Башҡортостандыҡы булды. Италия һәм Ҡаҙағстандан килгән экспозициялар ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты.

✓БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайҙың күптән түгел булып үткән ултырышында сығыш яһап, БР Премьер-министры Раил Сарбаев республика буйынса 300-ҙән ашыу хужаһыҙ гидротехник ҡоролма бар, уларҙы балыҡ үрсетеү өсөн эшҡыуарҙарға тәҡдим итергә уйлайбыҙ, тип билдәләне. Премьер әйтеүенсә, Рәсәй Ауыл хужалығы министрлығы әле балыҡ хужалығы эшмәкәрлеге буйынса программа әҙерләй. Ошондай уҡ программа Башҡортостанда ла әҙерләнә.

✓Бөрйән районында туристар өсөн туҡталҡа асыу тантанаһы булып үтте. Ул Башҡортостанда асылған тәүге туҡталҡа. Проект БР Хөкүмәтенең туризмды үҫтереү буйынса махсус программалары сиктәрендә тормошҡа ашырылды. Ошо уҡ көндө туристарға Шүлгәнташ мәмерйәһенә тиклем Ағиҙел буйлап йөҙөп төшөүгә старт бирелде.

✓Башҡортостан юлдаш телевидениеһының Бөйөк Еңеүҙең 65 йыллығы сиктәрендә ойошторған "Мине иҫкә ал" тигән социаль-патриотик акцияһы дауам итә. Акцияла ҡатнашыу өсөн Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан туғандар һәм таныштарығыҙҙың фотоһын pobeda@bashtv.ru электрон адресына ебәрергә кәрәк. Улар БСТ каналы сайтына www.tv-rb.ru ҡуйыласаҡ. Фронтта ҡатнашыусының исем-фамилияһын, тыуған йылын, ҡайһы фронтта һуғышыуын күрһәтергә онотмағыҙ. Шулай уҡ 22 июндә Еңеү паркында Хәтер таҡтаһы булдырыласаҡ.

✓Башҡорт дәүләт аграр университетында иркен һәм бөтә уңайлыҡтары булған яңы физкультура-һауыҡтырыу комплексы асылды. Тантанала БР Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев һәм башҡа рәсми кешеләр ҡатнашты. Ауыл хужалығы белгестәре әҙерләүсе уҡыу йорто спортсыларының уңыштары Башҡортостандан ситтә лә киң билдәле. Бында студенттар 33 секцияла төрлө спорт төрҙәре менән шөғөлләнә.

✓ *Бөгөн депутаттар ултырыштарға йөрөмәһә, автомобилдәренә рөхсәт ителмәгән "ялпылдаҡ"тар урынлаштырһа, иртәгә ябай кешеләр рөхсәт ителмәгән митингыға сығасаҡ, светофорҙың ҡыҙыл утына үтәсәк.*

АҘНА ШАҢДАУЫ

БАЛЫҠ ҠАЙҺЫ ЕРЕНӘН СЕРЕЙ,

йәки Ни өсөн Дәүләт Думаһы ултырыштары ярым буш залда үтә?

Йәмәғәт, депутаттар нимә менән шөғөлләнә икән? Беләһегеҙме? Закондар ҡабул итәләр, кешеләрҙең тормошон яҡшыртыу тураһында фекер алышалар, ил яҙмышын, дәүләттең киләсәген хәл итәләр, тиһегеҙме? Мин дә шулай уйлайым. Беҙ, йәмәғәт, бер уйҙабыҙ икән. Яҡшы кешеләр генә шулайтып башҡалар хаҡында тик яҡшы уйҙа була, имеш.

Депутаттар, тигәс тә, уларҙың да төрлөләре - бар, кем хаҡында һүҙ алып бармаҡсыһың, тигән тауыш ишетелә. Дөрөҫ иҫкәрмә. Бик урынлы һәм ваҡытлы. Ысынлап та, депутаттарҙың урындарҙағыһы, йәғни ауыл, район һәм ҡала советтарына һайланғандары була. Улар көн һайын күҙ алдында. Һайлаусылары менән минут һайын тиерлек осрашып ҡына тора. Бар ҡылыҡтары, эшләгән эштәре йәмәғәтселеккә билдәле. Бер нәмәне лә йәшереп булмай. Уңһалар ҙа, туңһалар ҙа, йәмәғәт алдында.

Ә тағы ла федераль кимәлдәге, Дәүләт Думаһындағы депутаттар бар. Улар илебеҙҙең баш ҡалаһында - Мәскәүҙә. "Батша алыҫ, Алла юғары" тигән мәҡәлдәге кеүек, улар ҙа алыҫ та, юғары ла. Бер һайланһалар, табырмын, күрермен, тотормон, тимә. Мәскәү ҙур. Хәс тә Алла, һис юғында, батша кеүектәр үҙҙәре. Әҙ ҙә түгел, күп тә түгел. Теүәл - 450 кеше. Төрлө партия ағзалары улар. Билдәле бит: беҙҙең парламент күп партиялы. Демократия, шайтан алғыры. Араларында коммунистар ҙа, либерал-демократтар ҙа, башҡа әкәм-төкәм бар. Күпселек - "Беҙҙәм Рәсәй" партияһынан. Йәштәре лә бар, ҡарттары ла. Араларында ҡатын-ҡыҙҙар ҙа юҡ түгел. Әммә ир-аттар өҫтөнлөк итә.

Депутаттарыбыҙҙың ярлылары юҡ тиерлек. Хәйер, был хаҡта артабан һүҙ булыр әле. Улар араһында бар донъяға билдәле кешеләр ҙә бар. Мәҫәлән, Жириновский. Уның дуҫтары һәм таныш-белештәре араһында сит ил сәйәсмәндәре, дәүләт башлыҡтары. Ваҡытында Владимир Вольфович хатта Ираҡ башлығы Сәддам Хөсәйен менән дуҫ булыуы хаҡында ихласлап маҡтана торғайны. Ғалим Жорес Иванович Алферовтың исеме бар донъяға билдәле. Күренекле йырсылар, мәҫәлән, Иосиф Кобзон йәки Николай Расторгуев та депутат булып китте. Билдәле спортсылар - Алина Кабаева менән Светлана Хоркина ла депутаттар. Йәмәғәтселеккә таныш булмаған депутаттар ҙа бар. Мәҫәлән, Русских Алексей Юрьевич исеме һеҙгә нимә һөйләй? Миңә лә таныш түгел ул.

Әйе, улар төрлөләр. Әммә депутаттарҙы берләштергән бер сифат бар. Дөрөҫөрәге, булырға тейеш. Улар барыһы ла Дәүләт Думаһына дәүләткә, илгә, халыҡҡа хеҙмәт итеү маҡсатында килгән. Килергә тейеш. Улар ағза булып торған партияларҙың уставтарында, программаларында тап шулай яҙылған бит. Ә халыҡҡа хеҙмәт итеү - иң ауыр шөғөлдәрҙең береһе. Әйтәйек, аныҡ бер кешегә, мәҫәлән, берәй генералға денщик булыу ауыр түгел, минеңсә. Ә халыҡҡа, айырыуса, Рәсәй халҡына хеҙмәт итеү, ай-һай, еңелдән түгел. Рәсәй халҡы башлыса юғары белем тураһындағы дипломға эйә, йәғни наҙан түгел. Тимәк, уйларға һәләтле. Йәғни электән "Кем ғәйепле?" һәм "Ни эшләргә?" тигән һорауҙарға яуаптар эҙләп оҫтарып киткән. Бынан тыш, Рәсәйҙә йәшәүселәр башҡа уңайһыҙ һорауҙар бирергә маһир. Улар оялып-нитеп тормай: "Бер депутат күпме тора? Уны ашатыу, эсереү, йәшәтеү, эшләтеү өсөн дәүләт ҡаҙнаһынан нисә мең һум тотонола?" - тигән һорауҙар бирә. Тик... яуап таба алмай.

Быйыл Дәүләт Думаһы депутаттары килемдәре тураһындағы декларацияларын асып һалды. Килемдәре бик юғары түгел икән дә баһа. Айлыҡ эш хаҡтары 160 мең һум тирәһе. Мәскәү өсөн аҡса түгел инде. Бер йылға ике миллион һум самаһы килеп сыға. 450 депутатҡа инһә 900 миллион һуммы шул... Беҙҙең дәүләт өсөн сүп кенә. Дәүләттән өмөт итеп ятһалар, депутаттарыбыҙ күптән астан үлеп бөткән булыр ине. Шуға ла улар хәлдәренән килгәнсә аҡса эшләргә тырыша. Әйтәйек, "Беҙҙәм Рәсәй" партияһы ағзаһы Леонид Симановскийҙың 2009 йылғы килеме 1 миллиард 184 миллион һум тәшкил итә. Газ торбаһында ултыра икән был депутатыбыҙ. Мәслихәт.

Киң билдәле сауҙа үҙәктәре селтәренә эйә булған Владимир Груздев инһә ярлыраҡ - 2009 йылда үҙе 936 миллион, ә хәләл ефете 692 миллион һум ғына эшләп алған. Жириновский тураһында әйтеп үткәйнек инде. Уны тағы ла иҫкә төшөрмәй булмай. Әйтергә кәрәк, Владимир Вольфовичтың килеме күп түгел. Эш хаҡы ғына - бер йылға 2,5 миллион һум. Ә инде уның улы Игорь Лебедев 2009 йылда 177 миллион һумға эйә булған, бынан тыш, ул 4 иркен (һәр береһенең майҙаны 300-әр квадрат метрҙан да ашыу) фатир хужаһы.

Һүҙ араһында ғына депутаттарҙың бурыстары тураһында ла әйтеп үтәйек. Юҡ, юҡ, Тыуған ергә һөйөү тойғолары, халыҡҡа хеҙмәт итеү тураһында әйтергә лә йыйынмайбыҙ. Уныһы былай ҙа аңлашылып тора. Депутаттарҙың закон тарафынан аҡҡа ҡара менән яҙылып ҡуйған бурыстары ла бар икән. Шуларҙың береһе - Дума ултырыштарында мотлаҡ ҡатнашыу. Икенсеһе - һәр бер депутат бер тауышҡа эйә. Һәм закондан тағы ла бер өҙөмтә - Дума йыйылыштары, унда депутаттарҙың дөйөм һанының яртыһынан күбеһе ҡатнашһа ғына, тулы хоҡуҡлы, тип иҫәпләнә. Аңлашылалыр, депутаттарға эш хаҡы йыйылыштарҙа ҡатнашҡан өсөн түләнә. Улар, әйтәйек, шахтерҙар тауға күмер сығарған кеүек, көн һайын күпмелер закон проектын уҡып сығып ҡабул итергә йәки кире ҡағырға тейеш түгел. Әммә йыйылыш ваҡытында залда мотлаҡ булырға тейеш. Ҡабатлайым - мотлаҡ. Юғиһә - прогул. Әлбиттә, бер генә депутат тауыш биреүгә йоғонто яһай алмай. Ә Дума ултырыштарына ун, йәки егерме түгел, ә йөҙләгән депутат килмәһә? Ә залда, әйтәйек, ни бары 88 кеше генә булһа? Улар ҡабул иткән закондар үҙ көсөнә эйәме? Ә улар башҡа депутаттар өсөн тауыш бирһә (йәғни, уларҙың тауыш биреү карточкалары менән файҙаланһа), ҡабул ителгән законға ышанырға буламы? Уға ышанырға кәрәкме?

Беҙҙе һәр ваҡыт илдең ысын мәғәнәһендәге граждандары булырға, балаларыбыҙҙы закондарға таянып, закондарҙы үтәп йәшәгән гражданин итеп тәрбиәләргә саҡыралар. Ул закондар дөрөҫмө, бар депутаттар ҡатнашлығында ҡабул ителгәнме икән? Аңлайһығыҙҙыр, бында һүҙ Думаның бер тауыштан булыуы хаҡында бармай. Оппозиция, йәғни башҡаларҙан айырмалы фекер һәр ваҡыт булырға тейеш. Юғиһә бер фекер өҫтөнлөк итәсәк. Ә уны һәр ваҡыт хаҡ тип әйтеп булмай. Һүҙ элементар әҙәплелек хаҡында бара. Президент ҡул ҡуйған документ менән үҙе танышмаһа, ул нимәгә кәрәк? Факсимиле булһа, шул еткән. Депутаттар ултырыштар ваҡытында үҙҙәренең төп бурысын үтәмәй, ҡайҙалыр йөрөй икән, улар ни бысағыма кәрәк? "

Балыҡ башынан серей", тигән мәҡәлде беҙ йыш ҡына ҡабатлайбыҙ. Мәғәнәһен аңлайбыҙ микән? Законға ярашлы йәшәмәһәк, илебеҙҙе аяҡҡа баҫтырып булмай, тигән фекер беҙҙә күптән яңғырай. Шул иҫәптән депутаттар ҙа закон өҫтөнлөгө хаҡында һөйләргә ярата. Асылда инһә берәү ҙә уны үтәргә ашыҡмай. Киреһенсә, закон нигеҙендә йәшәргә тырышҡандарға сәйерһенеп, ғәжәпләнеп ҡарайҙар. Бөгөн депутаттар ултырыштарға йөрөмәһә, автомобилдәренә рөхсәт ителмәгән "ялпылдаҡ"тар урынлаштырһа, иртәгә ябай кешеләр рөхсәт ителмәгән митингыға сығасаҡ, светофорҙың ҡыҙыл утына үтәсәк. Илдә тәртипһеҙлек, ҡаңғырыҡ һәм боларыш башланасаҡ. Беҙгә, йәмәғәт, ул кәрәкме? Әлбиттә, юҡ. Ә уларға?..

Таһир ИШКИНИН.

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Республиканың спорт федерацияһы етәкселәре баш ҡалала балалар һабантуйы үткәрергә ҡарар итте. Ул 2 июндә "Салауат Юлаев" стадионында ойоштороласаҡ. Ҡатнашыусыларҙы төрлө спорт ярыштары һәм уйындары көтә.

✓30 майҙа Өфөлә Йәштәрҙең яҡташтар ойошмалары ассоциацияһы һабантуй үткәрә. Ул Өфөнөң Ҡариҙел һәм Ағиҙел йылғалары ҡушылған урында, былтырғы һабантуй урынында, үтәсәк. Саранның төп маҡсаты - йәштәрҙе айыҡ йәшәү рәүешенә ылыҡтырыу. Һабантуйға алкоголле эсемлектәр алып килеү ҡәтғи тыйыла. Шулай уҡ бөгөн, 29 майҙа, Өфө эргәһендәге Подымалово ауылының һабантуй яланында Әбйәлил йәштәре берлеге лә һабантуй ойоштора. Иртәнге сәғәт 10-да башлана.

✓Сочиҙа Рәсәй өлкәләре парламенттары һәм хөкүмәттәре, шулай уҡ ҡалалар хакимиәттәре араһында шахмат буйынса IX халыҡ-ара турнир үтте. Турнирҙа алты команда ҡатнашты. Өфө ҡала округы хакимиәтенең шахматсылар командаһы уларҙың алтыһында ла ҡатнаша килде. 2005 йылда - дүртенсе, 2006 йылда - өсөнсө урын яулаһалар, 2007 йылда "көмөш" призер булдылар, 2008 йылда өсөнсө урын яуланылар. 2009 йылда һәм бына быйыл беренселекте берәүгә лә бирмәнеләр.

✓1 июндә "Аҡбуҙат" ипподромында "Йондоҙҙар-балаларға" тигән мәрхәмәтлек концерты була. Башҡорт һәм татар эстрадаһы артистары ҡатнашлығындағы был концерт Халыҡ-ара балаларҙы яҡлау көнөнә арнала. Уның маҡсаты -онкоауырыу балаларға ярҙам итеү өсөн аҡса йыйыу. Ойоштороусылары - "Самородов-фонд" һәм "Ҡурай" музыкаль каналы.

✓1 июндә Якутов исемендәге паркта балалар өсөн матур байрам үтәсәк. Уны онкология һәм гемотология сирле балаларға ярҙам итеү буйынса "Данко" мәрхәмәтлек фонды ойоштора.

✓1 июндә Ленин районында ауыр хәлдә ҡалған ғаиләләрҙән сыҡҡан балаларҙы, инвалид балаларҙы Ағиҙел буйлап теплохода йөрөтөүҙе ойоштороу планлаштырыла. Шулай уҡ Профсоюздар һарайы алдындағы, "Йәдкәр" мәҙәниәт йорто алдындағы майҙандарҙа балалар өсөн сағыу байрам саралары ла үткәреләсәк.

✓ *Былтыр гимназиябыҙҙы тамамлаусы 57 баланың 56-һы юғары уҡыу йортона инде. Быйыл иһә 40 баланы үҙ аллы тормош юлына оҙатабыҙ, уларҙың 7-һе миҙалға дәғүә итә. Был уҡыусыларыбыҙға ла өмөт ҙур.*

БЕЛЕМ УСАҒЫ

Сираттағы уҡыу йылы тамамланды, тиһәк тә була. 25 майҙа ун беренсе класты тамамлаясаҡ 27434 бала өсөн һуңғы ҡыңғырау яңғыраны. Быйыл республикала шулай уҡ 46359 бала туғыҙынсы класты тамамлаясаҡ, уларҙың да күпмелер өлөшө үҙенең артабанғы тормош юлын төрлө колледждар менән бәйләйәсәк. Һуңғы ҡыңғырау байрамы һәм сығарылыш класс уҡыусылары тураһында баш ҡаланың башҡорт гимназиялары һәм лицейҙары уҡытыусылары һөйләй:

ҺУҢҒЫ ҠЫҢҒЫРАУ СЫҢЛАНЫ:

яңы тормош башлай йәш кеше

Әлфир ҒАЙСИН, Рәми Ғарипов исемендәге Башҡорт республика гимназия-интернаты директоры: 65 йыллыҡ бай тарихы һәм йолалары булған гимназия-интернатыбыҙҙы быйыл 175 уҡыусы тамамлай. Башҡа уҡыу йорттары менән бер рәттән, беҙҙең гимназия илебеҙгә, халҡыбыҙға йыл да белемле, тырыш, шәхес булып формалашҡан, киләсәктә ил хужалары булырҙай уҡыусылар сығара. Быйылғы сығарылыш уҡыусылары бигерәк әүҙем булды: улар гимназияла уҡыу осоронда төрлө кимәлдә үткән ярыштарҙа, олимпиадаларҙа, ғилми конференцияларҙа, конкурстарҙа еңеүҙәр яуланы. Бындай еңеүҙәр уларҙың алдағы тормошонда ла күп булһын, тип теләр инем.

Шәмсулла ХӘБИБРАХМАНОВ, 136-сы башҡорт лицейы директоры: Лицейыбыҙ быйыл үҙенең 34 ҡарлуғасын осора. Ә былтыр сығарылыш уҡыусылары һаны 52 ине. Уҡыусыларҙың һәр береһен үҙ балабыҙҙай яҡшы беләбеҙ, улар өсөн шатланабыҙ ҙа, борсолабыҙ ҙа. Улар лицейыбыҙҙың йөҙөк ҡашы булған, киләсәккә ышаныслы ҡараған, бик тырыш, белемле сығарылыш. Киләсәккә ҙур маҡсаттар ҡуялар, һәр береһе илебеҙҙең төрлө юғары уҡыу йорттарына уҡырға инергә хыяллана. Быйыл башҡа йылдағыларға ҡарағанда Мәскәү һәм Санкт-Петербург ҡалаларына уҡырға инергә теләүселәр һаны икеләтә артты. Был беҙҙе ҡыуандыра, тимәк, балалар үҙ белеменә ышана, ҡыйыу, тәүәккәл. Улар әле үк үҙҙәрен университеттарға белем яғынан ғына түгел, рухи яҡтан да әҙерләй. Быйыл Октябрь районы буйынса уҙғарыла килгән "Талантлы балалар" слетының ун йыллыҡ юбилейында ун йылға йомғаҡ яһаныҡ. Һөҙөмтәлә беҙҙең лицей иң яҡшы биш мәктәп иҫәбенә инде. Ошо осорҙа бөгөнгө сығарылыш уҡыусылары уҡыны. Тимәк, мәктәбебеҙҙең иң яҡшылар рәтенә инеүендә уларҙың да өлөшө бар.

Илдар МОТАЛОВ, Ф. Мостафина исемендәге 20-се ҡала башҡорт гимназияһы директоры: Белеүегеҙсә, беҙҙең гимназия баш ҡалалағы тәүге башҡорт мәктәбе бит инде, быйыл уның ойоштороло уына 40 йыл тула. Был уҡыу йорто кимәлде һәр саҡ юғары тотҡан һәм әле традициялар дауам итә. Былтыр гимназиябыҙҙы тамамлаусы 57 баланың 56-һы юғары уҡыу йортона инде. Быйыл иһә 40 баланы үҙ аллы тормош юлына оҙатабыҙ, уларҙың 7-һе миҙалға дәғүә итә. Был уҡыусыларыбыҙға ла өмөт ҙур, улар араһында республика, баш ҡала кимәлендәге олимпиадаларҙа, конкурстарҙа, фәнни конференцияларҙа әүҙем ҡатнашып, алдынғы урындар яулағандар ҙа бар. Улар Өфөләге генә түгел, ә Рәсәй кимәлендәге уҡыу йорттарында беҙҙең гимназиябыҙҙың, республикабыҙҙың данын лайыҡлы күрһәтәсәк әле, тип өмөт итәм

Миңниә ЙӘҒӘФӘРОВА, М.Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһының тәрбиә һәм уҡыу эштәре буйынса директор урынбаҫары: Гимназиябыҙ алдынғы, әүҙем уҡыусылары менән Өфө ҡалаһында ғына түгел, республика кимәлендә лә киң танылыу яуланы. Был уҡыу йылында 29 уҡыусыбыҙ тыуған мәктәбе менән хушлаша. Улар барыһы ла яҡшы уҡыны, йәмғәт эштәрендә әүҙем булды, төрлө олимпиадаларҙа, ғилми конференцияларҙа алдынғы урындар яуланы. Ике уҡыусыбыҙ алтын һәм көмөш миҙалдарға дәғүә итә. Йыл һайын сығарылыш уҡыусыларының бөтәһе лә тиерлек юғары уҡыу йорттарына уҡырға инә. Мәҫәлән, былтырғы уҡыу йылында гимназияны 25 уҡыусы тамамланы, уларҙың 95 проценты юғары уҡыу йортона уҡырға инде. Уҡыусыларҙың күберәк техник вуздарҙы һайлауы ла беҙҙе һөйөндөрә, сөнки киләсәктә ошо йүнәлештәр буйынса эшләүсе үҙебеҙҙең милли кадрҙарҙың күберәк булыуын күрге килә.

Резедә ИБРАҺИМОВА, 140-сы башҡорт гимназияһының уҡытыу эштәре буйынса директор урынбаҫары: Быйыл да һуңғы ҡыңғырау байрамы йылдағыса бик матур, тантаналы рәүештә үтте. Быйыл беҙҙең гимназияны 15 уҡыусы тамамланы, уларҙың дүртәүһе миҙалға дәғүә итә. Сығарылыш уҡыусылары һаны былтырғыға ҡарағанда икеләтә аҙыраҡ. Былтыр 11-се класты 28 уҡыусы тамамланы һәм уларҙың икәүһе көмөш миҙал менән сыҡты. 25 уҡыусыбыҙ бөгөнгө көндә юғары уҡыу йорто студенттары. Быйылғы уҡыусылар ҙа һынатмаҫ, тигән өмөттәбеҙ.

Әлиә ҒӘЙНЕТДИНОВА, Ҡ.Дәүләткилдиев исемендәге Республика һынлы сәнғәт гимназия-интернаты уҡытыусыһы: Гимназиябыҙ быйыл үҙенең 38 уҡыусыһын оло тормош юлына оҙата. Сығарылыш уҡыусыларының берәүһе алтын, икәүһе көмөш миҙалға дәғүә итә. Былтыр беҙҙең гимназия ремонтҡа ябылды һәм уҡыусылар уҡыу йылын үҙҙәренең ауыл мәктәбенә ҡайтып тамамланы. Шуға күрә гимназиябыҙ үҙенең ҡарлуғастарын осора алманы. Уларҙың 80 проценты юғары уҡыу йортона, ҡалғандары урта уҡыу йорттарына уҡырға инде. Беҙҙең уҡыусылар күбеһенсә һөнәрҙе үҙебеҙҙең йүнәлеш буйынса һайлай. Күберәк Өфө Сәнғәт академияһына һәм М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетына живопись, художество-графика, һынлы сәнғәт һәм дизайн һөнәрҙәре буйынса уҡырға инәләр. Быйылғы сығарылыштан 10 уҡыусыбыҙ үҙебеҙҙең специальность буйынса Бөрө дәүләт академияһының художество-графика факультетына уҡырға инде, тип әйтһәк тә була, тик БДИ һөҙөмтәләре генә кәрәк.

Эльвира КИЛСЕНБАЕВА, Республика иҡтисад лицей-интернатының фәнни методик эштәр буйынса директор урынбаҫары: Быйыл 88 уҡыусыбыҙ өсөн һуңғы ҡыңғырау яңғыраны. Уларҙың етәүһе уҡыуҙа яҡшы уңыштары өсөн алтын һәм көмөш миҙалдарға дәғүә итә. Былтыр лицейҙы 94 уҡыусы тамамланы һәм уларҙың туҡһаны юғары уҡыу йортона уҡырға инде. Беҙҙең уҡыусылар республика юғары уҡыу йорттары менән генә сикләнеп ҡалмай, ә Мәскәү һәм Санкт-Петербург ҡалалары уҡыу йорттарын да яулай. Былтыр 12 уҡыусыбыҙ ошо ҡалаларҙағы уҡыу йорттарына уҡырға инде. Беҙ уларҙың ҙур ҡалаға ынтылыуына ҡыуанабыҙ. Уҡыһындар, яҡшы белем алһындар, тик һуңынан сит ерҙәрҙә ҡалмай, республикабыҙға әйләнеп ҡайтһындар, алған белемдәрен илебеҙ мәнфәғәте өсөн ҡулланһындар, тип теләйбеҙ.

ИҒТИБАР!

УҠЫРҒА САҠЫРАБЫҘ

Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты 2010-2011 уҡыу йылына 8-9-сы синыфтарға уҡыусылар ҡабул итә. Уҡыусыларҙың математика, рус теле, башҡорт теле буйынса белем кимәле тикшерелә.

Ҡабул итеү көндәре: 16 июнь, сәғәт 10.00 - Өфө ҡалаһы, Рәсәй урамы, 88, БРГИ (белешмә өсөн телефон: 284-66-09); 22 июнь, сәғәт 10.00 - Йылайыр районы Юлдыбай урта мәктәбе; Мәләүез районы Юлдаш урта мәктәбе.

Үҙегеҙ менән тыуыу тураһында таныҡлыҡ (төп нөсхә һәм күсермәһе), уҡыусының шәхси кенәгәһе күсермәһе, шаҡмаҡлы дәфтәр һәм ручка алып килеү мотлаҡ.

БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә йылытыу миҙгеленең тамамланыуы һәм ҡала хужалығын киләһе миҙгелгә әҙерләү, шулай уҡ 10-12 июндә баш ҡала буласаҡ байрам сараларына әҙерлек тураһындағы мәғлүмәттәр тыңланды. Билдәләнеүенсә, 10-12 июндә төп байрам саралары Дуҫлыҡ монументы, Салауат Юлаев һәйкәле һәм Ленин исемендәге майҙандарҙа үтәсәк һәм фейерверк менән тамамланасаҡ.

✓Өфө ҡала округы хакимиәтендә журналистар менән осрашыуҙа йәйге осорҙа эшләйәсәк дөйөм туҡланыу һәм сауҙа предприятиелары эше тураһында һүҙ барҙы. Билдәләнеүенсә, Өфөлә 174 дөйөм туҡланыу предприятиеһы йәйге осорҙа хеҙмәтләндереү режимына күсә. Улар үҙәк майҙандарҙа, йәйге кафеларҙа, парктарҙа, башҡа ял итеү урындарында урынлашасаҡ. Уларға ҡарата ҡағиҙә-талаптар раҫланған. Баш ҡаланың ҡулланыу базарында шулай уҡ 4188 сауҙа предприятиеһы эшләй.

✓Башҡорт дәүләт филармонияһы йырсыһы Марсель Ҡотоев III халыҡ-ара "От ыры" этник эстрада конкурс-фестивалендә ҡатнашасаҡ. Бәйге 10-12 июндә Хакас республикаһы Абакан ҡалаһында үтә. Ә БР Композиторҙар союзы рәйесе Айрат Ғайсин конкурсҡа жюри ағзаһы булараҡ саҡырылған. Конкурсты "ТӨРКСОЙ" халыҡ-ара ойошмаһы, РФ Мәҙәниәт министрлығы ойоштора.

✓28 майҙа Башҡорт дәүләт университеты кисәге мәктәп уҡыусылары, уларҙың ата-әсәләре, уҡыу йортон элек тамамлағандар өсөн оло байрам үткәрҙе. "БДУ дуҫтарын йыя" тигән был сара яңы йолаға нигеҙ һалды. Буласаҡ абитуриенттар үҙҙәре уҡыясаҡ университет, уҡытыусылар менән яҡынданыраҡ танышыу мөмкинлеге алды.

✓Башҡортостан Республикаһы Кеше хоҡуҡтары буйынса вәкиленең Өфө ҡала округы Совет районындағы йәмғәт ярҙамсыһы Айрат Искәндәров граждандарҙы хәрби хеҙмәткә алғанда хоҡуҡ һаҡлау мәсьәләләре буйынса ҡабул итә. Граждандар 4, 18, 25 июндә, 2,9 июлдә 16-18 сәғәттә Революцион урамының 111-се йортона килә ала. Белешмәләр өсөн телефон - 272-33-81.

✓ *Бөгөн һауыттағы һыуға төбәп әйтелгән изге һүҙҙең уның структураһын яҡшыға үҙгәртеүе иҫбатланған. Ит осрағында ла шул уҡ ҡағиҙә һаҡлана - мосолман әйткән доға һүҙҙәре иткә яҡшы үҙенсәлектәр өҫтәй.*

СОБХАНАЛЛА!

ХӘЛӘЛ РИЗЫҠ ӘҘЕРЛӘҮ...

Диниә назараты күҙәтеүе аҫтында

Һуңғы йылдарҙа хәләл ризыҡтар бик популяр булып китте. Рәсәй мосолмандарының дини аңлылығы, ойошмаларҙың социаль яуаплылығы, Ислам ҡанундарына яуап биргән аҙыҡ етештереүҙең күләме артты. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, бөтә етештереүсе ойошмалар ҙа был үҙенсәлекле ризыҡтың етештереү нескәлектәрен тиҙ генә төшөнөп бөтмәне. Ә шулай ҙа, нимә ул хәләл ризыҡ? Ҡулланыусыға уны ғәҙәти ризыҡтарҙан нисек айырырға? Ошо турала Башҡортостан мосолмандары диниә назараты янындағы "Хәләл" стандарты буйынса комитет етәксеһе урынбаҫары Мөнир ҒАФАРОВ һөйләй.

Нимә ул хәләл ризыҡ?

Ғәрәп теленән тәржемә итһәк, "хәләл" - рөхсәт ителгән тигәнде аңлата. Хәләл ризыҡҡа диңгеҙ хайуандары ите, йылға, диңгеҙ балыҡтары, емеш-еләктәр, йәшелсәләр, һөт һәм һөт ризыҡтары, шулай уҡ Ислам ҡанундары буйынса һуйылған хайуан ите инә. Бында төп ҡағиҙә: хайуан Аллаһы Тәғәләнең исеме менән, йәғни "Бисмилләһ" (Аллаһ исеме менән), "Аллаһу Әкбәр" (Аллаһ бөйөк) тип әйтелеп һуйылырға тейеш, сөнки Ул - бөтә нәмәне яралтыусы, Уның рөхсәтенән тыш малды үлтерергә беҙҙең хоҡуғыбыҙ юҡ. Бынан башҡа, малды интектермәҫ өсөн бысаҡтың үткер булыуы бик мөһим, һуйыр алдынан малды ҡурҡытырға ярамай, шулай уҡ ул башҡа малдарҙың нисек үлтерелгәнен күрмәҫкә тейеш. Малды мотлаҡ бәлиғ булған мосолман һуя.

Шулай уҡ Ҡөрьән буйынса тыйылған "харам" ризыҡтар ҙа бар. Быға суҫка ите, үләкһә, Аллаһы Тәғәлә исеме менән һуйылмаған мал ите, ҡан һәм иҫерткес әсемлектәр инә.

Ҡанды тыйыу нимәгә бәйле?

Түшкәне бүлеү ҡандың төп өлөшө ағып бөткәс кенә башлана - бының өсөн оҙта киҫә белергә һәм билдәле бер ваҡыт көтөргә кәрәк. Һорауға килгәндә, ысынында ла был талап логикаға нигеҙләнгән. Ҡан - ул бактериялар еңел үҫешкән мөхит. Ул иттә ҡалһа, боҙолор өсөн шарттар барлыҡҡа килә. Бынан тыш, иттең тышҡы йөҙө боҙола, ул ҡыҙара һәм еҫләнә башлай.

Ғөмүмән, хәләл ит ябай иткә ҡарағанда күпкә тәмлерәк һәм файҙалыраҡ һанала. Бөгөн һауыттағы һыуға төбәп әйтелгән изге һүҙҙең уның структураһын яҡшыға үҙгәртеүе иҫбатланған. Ит осрағында ла шул уҡ ҡағиҙә һаҡлана - мосолман әйткән доға һүҙҙәре иткә яҡшы үҙенсәлектәр өҫтәй һәм уның сифатына ыңғай тәьҫир итә.

Аҙыҡ етештереү бөгөн яңы кимәлгә күтәрелеүгә бәйле, "Хәләл" маркировкаһын ҡулланырға рөхсәт бирер алдынан беҙ аҙыҡтағы өҫтәмәләрҙе лә тикшерәбеҙ. Мәҫәлән, буяуҙар араһында бөжәктәрҙән етештерелгән кармин тыйыла. Консерванттар, тәмде һәм еҫте көсәйткестәр хәләл һанала. Әгәр теге йәки был аҙыҡтың составында бекон еҫе булһа, быныҡ бер ниндәй ҡурҡынысы юҡ, сөнки ул ысын бекон түгел! Стабилизаторҙар араһында желатин тыйылған, сөнки ул малдың сеймалынан етештерелгән - ә ул малдың нисек һуйылғанын бер кем дә белмәй! Ә бына һөйәк фосфатынан башҡа эмульгаторҙар бөтәһе лә тиерлек рөхсәт ителгән.

"Хәләл" ризыҡтарҙы ҡайҙа етештерәләр?

Хәләл продукциялар етештереүселәр араһынан иң беренсе беҙҙең ҡош фабрикалары тураһында һөйләп үтергә кәрәк. Был фабрикаларҙа бөтә ҡоштар ҙа Ислам ҡанундары буйынса салына. Быға тиклем Рәсәйҙә бер ойошма ла тулыһынса хәләл тауыҡ етештермәне. Башҡа республика һәм төбәк ҡунаҡтары беҙҙең был эште ойоштора алыуыбыҙға аптырай. Әлбиттә, ябай булмаған шарттарҙа эшләргә риза булыусы мосолмандарҙы табыу, дөрөҫ технология сылбырын ойоштороу еңелдән түгел. Шуға ҡарамаҫтан, тауыҡ ите һәм ярымфабрикаттарҙы етештереүҙе беҙ 100 процент менән үтәнек. Мәҫәлән, үрҙә әйтеп үтелгән ҡош фабрикаһы штатында һәр ваҡыт биш мосолман була. Шуныһы мөһим: был эштәр менән үҙҙәренең эше өсөн Аллаһы Тәғәлә алдында яуап тотасағын аңлаған, шуға күрә үҙ вазифаларына яуаплы ҡараған мосолмандар шөғөлләнә.

Бөгөн республикала "Хәләл" стандарттарына тура килгән тауыҡ колбасаһы етештерелә. Унда тыйылған өҫтәмәләр юҡ, хатта уның ҡабығы бөтә ҡағиҙәләр буйынса һуйылған тәбиғи мал эсәгенән эшләнгән. Һыйыр колбасаһы менән эштәр ҡатмарлыраҡ. Әлегә проблеманы шулай хәл итәбеҙ: Дүртөйлө ойошмаларының береһендә дүшәмбенән шаршамбыға тиклем традицион рецептура буйынса эш бара, ә кесаҙна йыһаздар тулыһынса йыуыла, ә йома хәләл продукция етештерелә.

Республикала шулай уҡ "Хәләл" стандарты буйынса ярымфабрикат цехтары бар. Әммә бында ла әлегә барыһы ла яйланып еткерелмәгән. Ҡыҙыҡлы бер миҫал килтереп үтәм: ун йылдар тирәһе элек Мәскәүҙә "Мосолман" билмәне сығарыуға барлыҡ техник шарттар булдырылды. Әммә, үкенескә күрә, етештереүсе рецептураға һаҡһыҙ ҡараған, суҫка ите булмаған өсөн генә был билмәндәр "Мосолман" тип аталған. Ә һыйыр итенең Аллаһы Тәғәлә исеме менән һуйылғанмы, юҡмы икәнлеге бер кемде лә ҡыҙыҡһындырмаған. Үкенескә күрә, күп кенә ярымфабрикаттар ошо юл менән етештерелгән. Республикабыҙҙа ла шундай хәлдәр килеп сыҡҡан. Һәм әлегә тиклем беҙҙең баҙарҙарҙа хәләл булмаған "Мосолман" билмәндәрен һатыусы бер нисә эшҡыуар сауҙа итә. Юридик яҡтан беҙ быныҡ менән бер нәмә лә эшләй алмайбыҙ, тик ҡулланыусыны иғтибарлы булырға киҫәтә генә алабыҙ.

ШУЛАЙ ИТЕП...

Әлегә икмәк комбинаттары хәләл технологияларҙы үҙләштерергә ҡабаланмай, ә был бик перспективалы өлкә. Эше лә әллә ни айырылмай: составтағы алкоголдән (шарап, ром), желатиндан һәм башҡа бер нисә компоненттан ғына баш тартырға кәрәк. Үкенескә күрә, беҙҙең магазиндарҙа һатылған торттар, пирогтар әлегә был талаптарға яуап бирмәй.

Ҡулланыусыларға шуны кәңәш итер инем, әгәр аҙыҡты һатып алған ваҡытта шикләнһәгеҙ, аҙыҡтың ҡабындағы "Хәләл" маркировкаһын тикшерегеҙ. Әгәр был һеҙҙе ышандырмаһа, һеҙ һатыусынан, аҙыҡ "Хәләл" стандартына тура килә, тип иҫбат итеүсе төбәк сертификаты һәм Экспертиза үҙәге тарафынан бирелгән документ-сертификат талап итә алаһығыҙ.

TӨРЛӨҺӨНӘН

ҠАЙҘА ҮЛЕМ ҺАТЫЛА?

РФ Наркотиктар әйләнешен контролдә тотоу буйынса федераль хеҙмәт 1 июндән 30 июнгә тиклем "Ҡайҙа үлем һатылыуын хәбәр ит!" тигән акция үҙғара.

Акция үткәрелгән ваҡытта республика наркоконтроленең "Ышаныс телефоны" тәүлек әйләнәһенә эшләйәсәк. 8-800-347-20-30 телефоны аша шылтыратып, наркотиктар әҙерләү, һаҡлау, һатыу тураһындағы һәм башҡа оператив мәғлүмәттәрҙе хәбәр итергә мөмкин. Республика халҡы наркотикҡа ҡаршы ведомство етәкселегенә тәҡдимдәрен һәм һорауҙарын www.gnkrb.ru рәсми сайтына ла еткерә ала.

АҘЫҠ ХӘҮЕФһЕҘ БУЛЊЫН

Рәсәйҙә туңдырылған балыҡ етештереүселәргә ҡарата талаптар көсәйә. "Аҙыҡ-түлек хәүефһеҙлеге һәм аҙыҡ ҡиммәтенә ҡарата гигиеник талаптар" санитар-эпидемиологик ҡағиҙәләр һәм нормативтарға индерелгән өҫтәмәләргә ярашлы, балыҡ продукцияһының ҡабындағы маркировкала продукт тураһында өҫтәмә мәғлүмәттәр булырға тейеш.

Айырып әйткәндә, глазурь менән ҡапланған туңдырылған балыҡтың массаһы глазурь массаһынан тыш күрһәтелергә; әгәр ҙә продукция туңдырылған балыҡтан яһалһа - уның ҡабаттан туңдырылыу ваҡыты, тоҙланған, маринадланған балыҡ туңдырылған булһа - был турала мәғлүмәт тауар ярлығында яҙылырға тейеш. Туңдырылған балыҡ итенең ирегәндән һуң дымлылыҡ күләме лә билдәләнгән. Яңы санитар ҡағиҙәләр 2010 йылдың 1 октябренән үҙ көсөнә инә.

МУНИЦИПАЛЬ ХЕҘМӘТКӘР КЕЙЕМЕ

"Башҡортостан Республикаһының муниципаль берләшмәләре советы" Ассоциацияһы идараһы муниципаль хеҙмәт хеҙмәткәрҙәренең махсус кейеме һәм уны кейеү ҡағиҙәләрен раҫланы. Муниципаль хеҙмәткәрҙәр өсөн махсус кейем индереүҙе Иглин районы хакимиәте тәҡдим иткән.

Иглиндар форма өҫтөндә эште 2009 йылда уҡ башлаған: эскизын уйлап тапҡан, уны кәрәкле инстанцияларҙа, хатта Рәсәйҙең геральдик комиссияһында раҫлатҡан. Хәҙер иглиндарҙың өлгөһөндә республиканың башҡа муниципалитет берләшмәләре лә рәсми кейемгә күсергә уйлай. Махсус кейем тураһындағы Положениеға ярашлы, урындағы үҙидара органдары өсөн парад-ял, көндәлек һәм махсус кейемдәрҙең йәйге һәм ҡышҡы варианты тегелгән. Форма - ҡуйы-ҡыҙыл төҫтә. Муниципаль хеҙмәткәрҙең вазифаһы һәм разряды погондарҙа күрһәтелә. Һул еңдә - БР муниципаль берләшмәһе Советы эмблемаһы төшөрөлгән һәм район йәки ҡала исеме яҙылған шеврон. Ассоциация идараһының муниципаль кимәлдә форма индереү тураһындағы ҡарары тәҡдим характерында булғанға күрә, форманы ҡабул итеү-итмәүҙе урындағы үҙидара вәкилдәре органдары хәл итергә бурыслы.

Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

Ҡан тамыры киңәйһә

❖ Тамыр киңәйгән урынға лимон киҫәге ябып, йоҡа ҡағыҙ менән ҡаплап бәйләргә;

❖ Ҙур ғына кәбеҫтә япрағын 1 сәғәт зәйтүн майында тоторға ла, өҫтөнә әҙ генә аш содаһы һибергә, уның өҫтөнә аҙыраҡ лимон һутын һығырға һәм ауыртҡан ереңә ябырға.

Ойотҡан (сөсө ҡатыҡ)

Көнөнә 1-2 мәртәбә бер нисә йотом ойотҡан эсһәң, ҡандың һелтеһен кәметә. Сөгөлдөр ҡушып ҡайнатылған һөттән ҡыҙыл ойотҡан яһап була, сөгөлдөр яратмаған кеше өсөн файҙалы. Шулай уҡ һөткә ҡырағай сейә япрағын һалып ҡайнатһаң да шифалы. Ундай ойотҡан йөрәккә шифа бирә.

Псориаз

Йонсотҡос һәм оҙаҡ бөтмәй торған сирҙе әллә ниндәй майҙар ҙа ала алмай. Әммә тоҙло кәбеҫтә һыуы уның "кәрәген бирә". Көнөнә 3-4 мәртәбә мамыҡты тоҙло кәбеҫтә һыуына манып, йәрәхәтле урындарға һөртөргә. 1 аҙнала йәрәхәт төҙәлә, ҡутырҙар ҡубып төшә, яңы тире үҫә.

Һуҡыр кесерткән (пустырник)

Йөрәк тулауын, ҡан баҫымы күтәрелеүен кәметеү, нервы ҡаҡшауын көйләү өсөн 1 ҡалаҡ киптереп ваҡланған үләнде 1 стакан ҡайнар һыуға һалып, өҫтөн ябаһың да, 2 сәғәт йылы урында тотаһың. Һөҙгәс, ашарҙан алда көнөнә 3-4 мәртәбә 1 ҡалаҡ эсәһең.

Тырнаҡтар айырылһа

❖ 1 стакан йылы һыуға 1 ҡалаҡ тоҙ һалып, бармаҡтарҙы тығып ултырырға;

❖ Өйҙә үҫкән ҡына гөлөнөң сәскә-япраҡтарын тоҙ ҡушып иҙергә һәм тырнаҡ өҫтөнә һалып бәйләргә. Тырнаҡ ҡыҙара, ҡубыуы ла бөтә.

❖ Көнбағыш майын йылытып, 1:1 өлөштә алма һеркәһе ҡушып, А витамины, йод, лимон һуты тамыҙып эшләнгән ҡатнашмаға бармаҡтарҙы тығып ултырырға кәрәк.

Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.

ҠЫҘ БАЛАЛАР ӨСӨН НӘСИХӘТ

Йоҡо ҡағиҙәләре

• Йоҡлағанда иҙеү бауҙарығыҙҙы сисегеҙ. Тығыҙ балдаҡтарығыҙ булһа, һалығыҙ. Ҡан йөрөүен тотҡарлаған ҡыҫтау кейемегеҙҙе кейеп ятмағыҙ.

• Йоҡо бүлмәһендә хушбуй, сәскә һәм гөлдәр булдырмағыҙ. Ятмаҫ элек һәм торғас (йәй көнө булһа), тәҙрәләрҙе асып, һауаһын яңыртығыҙ. Йоҡо бүлмәһендә яңы һәм саф һауа булырға тейеш.

• Хәсрәтле һәм ҡайғылы ваҡыттарҙа, йоҡлау алдынан бер аҙ ваҡыт күңелегеҙҙең тыныслanғанын сабыр итеп көтөгөҙ. Ҡарығыҙ тулы саҡта йоҡламағыҙ. Ашығыҙ һеңгәнсе сабыр итегеҙ.

Ашау һәм эсеү ҡағиҙәләре

• Тәрбиәле ҡыҙҙар менән тәрбиәһеҙ ҡыҙҙар аш янында билдәле булыуын белеп ашаған ваҡытта әҙәпле булыуға иғтибар итегеҙ.

• Аш янына бөтә кешеләр ултырғандан һуң тейешле урынға инсафлы ғына ултырығыҙ.

• Ашарға ултырғас, аш әйберҙәре менән уйнамағыҙ. Тәнегеҙҙе тырнамағыҙ. Ашъяулыҡҡа бик яҡын һәм бик йыраҡ булмағыҙ. Ҡулығыҙ менән таянмағыҙ. Тура ултырығыҙ һәм ашағанда бер аҙ башығыҙҙы түбән эйегеҙ. Уң ҡулығыҙ менән ашағыҙ.

• Таҫтамалды тубығығыҙға ҡуйығыҙ. Был таҫтамалға тир һөртмәгеҙ. Танау һемгермәгеҙ. Иң элек "Бисмилла"уҡығыҙ һәм ошонан һуң ашай башлағыҙ.

• Ашаған ваҡытта ҡомһоҙланмағыҙ. Береһен яҡшылап сәйнәп йотмаҫтан элек икенсеһен ауыҙығыҙға алмағыҙ. Ауыҙ тултырып ҡапмағыҙ. Ҡашығығыҙҙы табаҡтың һәр тарафына йөрөтмәгеҙ.

• Ашамлыҡтарҙы аҡтармағыҙ, береһен ҡуйып, икенсеһен һайламағыҙ. Яныҫыҙҙағы ҡатын-ҡыҙҙарҙы уңайһыҙламағыҙ.

• Ололар мәжлесе булмаһа,иптәштәрегеҙ менән әҙәп һәм сабырлыҡ менән һөйләшегеҙ. Һүҙ ярыштырмағыҙ. Хәсрәтле һүҙҙәр һөйләшмәгеҙ. Үҙегеҙҙең һәм башҡаларҙың ашауынан һүҙ сығармағыҙ.

• Ҡунаҡта булғанда өй хужаһы ашарға йәки эсергә ҙтенһә, ваҡытығыҙ булһа, тәҡдимен ҡабул итегеҙ, ваҡытығыҙ булмаһа, үҙегеҙҙе көсләмәгеҙ: "Рәхмәт", - кеүек мөләйем һүҙҙәр менән яуап ҡайтарығыҙ.

• Башҡа береһе һорап алған ныуҙы һеҙ алып эсмәгеҙ. Һыу эскәндә тауышһыҙ һәм әҙәпле генә ауыҙығыҙҙа бер нәмә лә юҡ саҡта эсегеҙ. Һуңынан таҫтамал менән ауыҙығыҙҙы һөртөгөҙ.

• Ҡунаҡта булғанда: "Быны яратмайым", - тигән һүҙҙәр һөйләмәгеҙ. "Теләгем юҡ" кеүек һүҙҙәр, матур һылтау күрһәтегеҙ һәм ниғмәттәрҙең хуш икәнен аңлатығыҙ.

• Башҡаларҙы саҡырғанда ризыҡтарығыҙҙы маҡтамағыҙ. "Ашағыҙ, эсегеҙ", - тип ҡыҫтамағыҙ. Кешенең, оялып, артыҡ ашамауына сәбәп булмағыҙ. Ҡунаҡтарҙы ҡыҫтау - уларҙың күңелен ебәреү икәнде онотмағыҙ.

(Дауамы бар).

АТА-ӘСӘ ҠОЛАҒЫНА

ТӘНӘЙҘӘРГӘ ТӘҒӘЙЕН ТӘРБИӘ

Ишле балаларҙың аралашыуы, бергә уйнауы хаҡында.

Алтынсы һабаҡ: "Алдаштырыу алдау түгел"

Бала бәләкәй саҡта кейенергә яратмай. Иртәнсәк тороп, яланаяҡ һикереп төшөүҙе, тышҡа сыҡҡанда йоҡараҡ кейенеүҙе өҫтөнөрәк күрәләр. Ә уларға өшөү, һыуыҡ тейеү, ауырып китеү тигән төшөнсәләрҙе аңлатыуы ҡыйын әле. Ошондай мәлдә иң еңел юл - алдаштырыу.

- Балам, ана, аяғың "Өшөйөм, өшөйөм, миңә тиҙ генә ойоҡ кейҙер", ти. Өшөйҙөр шул, иҙән һыуыҡ бит. Усың менән баҫып ҡара әле, уй, ҡалай һыуыҡ. Кулдәгең "Мин дә өшөйөм, йылы кофта кейҙер миңә", ти.

Балала йәлләү, башҡаларҙың хәленә инеү, ярҙам итке килеү теләге көслө була. Ошо тойғоно уның үҙенә ҡарата файҙаланыу яҡшы. Ни генә эшләһәң дә, әйбер, кейем, уйынсыҡ аша һоратырға кәрәк. Әйтәйек, бутҡа ашарға әүәҫ булмаһа, бармағынмы, ҡулынмы һөйләндерәһең: "Мин нәҙек кенә булып киттем. Витамин кәрәк миңә, витамин кәрәк. Бутҡа ашатығыҙ, һөт эсерегеҙ, ҡатыҡ эсерегеҙ..."

Берәй хәүефле урындан үткәндә, юл аша сыҡҡанда йәки ашыҡҡанда, баланың үҙаллы булғыһы килеүе арҡаһында төрлө уңайһыҙ хәлдәргә ҡалыуың ихтимал. Әйтәйек, автобустан сыға һалырға, йәшел ут янған мәлдә юл аша сығып өлгөрөргә кәрәк. Ә бала, үҙем дә үҙем, ти. Үҙем дә үҙем, тип нығышҡан мәлендә тупаҫ рәүештә тыйып, үҙаллылыҡҡа ынтылышын һындырып ҡуйыуың да ихтимал. Был хәлде алдан уҡ күрә белергә һәм әҙер булырға, баланы әҙерләргә кәрәк.

- Балам, һин хәҙер ҙур үҫтең, миңә ярҙам итә башланың. Өйҙә лә һауытһаба йыйыштырышаһың, ҡурсаҡтарыңды ҡарайһың. Ә хәҙер мине автобустан етәкләп алып төш. Мин төшкәнгә тиклем һин ҡулымдан тотоп тор, шунан мин һине төшөрөрмөн...

Урам аша сығырға тура килгәндә лә бала ҡулын бирмәй маташа.

- Балам, әйҙә мине етәкләп кенә алып сыҡ. Һин бит ниндәй ут тоҡанғанда урам аша сығырға икәнлекте, ҡасан йүгерергә кәрәклекте беләһең...

Аҙаҡ иһә рәхмәт әйтергә, мәктәп ҡуйырға, хатта өйгә ҡайтҡас, өйҙәгеләргә был ҙур ярҙам тураһында һөйләргә онотмаҫҡа кәрәк.

Етенсе һабаҡ: "Ишле балалар"

Баланы бер-бер артлы үҫтереү ҡулайлыраҡ. Улар туған ғына түгел, серҙәш, дуҫ, фекерҙәш, бер-береһенә күҙ-ҡолаҡ була. Әммә әле һүҙ ул турала түгел.

Тиң үҫкән балалар тиҙ генә сәкәләшеп, тырнашып, һуғышып китеүсән. Тәтәйгә лә талашалар, "Беҙ талашҡайныҡ бигерәк юҡ өсөн" тигән бәйеттәге кеүек, юҡ өсөн генә асыуланышып китәләр, шунда уҡ ярашып та алалар. Әммә әләгешкән саҡтарында ҡулдарына ни тура килһә, шуны бәреүҙәре, икенсеһен йәрәхәтләүҙәре ихтимал. Берәй нәмәне боҙоп ҡуйыу ихтималлығы ла бар. Хатта икеһенә ике төрлө уйынсыҡ тоттороп, айырым ултыртып ҡуйһаң да низағлашыу сәбәбен таба улар. Шуға үҙҙәрен генә ҡалдырыу хәүефлерәк. Ә аҙ ғына ваҡытҡа булһа ла балаларҙы яңғыҙ ҡалдырып тороу мохтажлығы сығып ҡына тора. Бындай ваҡытта иң ҡулайлыһы - өй уйнау. Ҙурырағы - әсәй йәки апай. Әгәр балалар баҡсаһына йөрөһәләр - тәрбиәсе. Ҙуры малай булһа - атай йәки тәрбиәсе. Ул инде ололар нисек эшләй, ни эшләй - шулай ҡыланасаҡ, ә бәләкәйе бер генә лә ҡарышыуһыҙ уны тыңлаясаҡ. Икеһе ике башҡа өй уйнап, бер-береһен ҡунаҡҡа саҡырышһалар ҙа әүрәп уйнаясаҡтар.

БАЛАҢА УҠЫ

ХИКМӘТЛЕ БЕЙӘЛӘЙҘӘР

Талип

Талип дәрестән һуң өйҙәренә тура ҡайта торған малай түгел инде ул. Эт һуғарып йөрөй торғас, ул Миҙхәт иптәше менән теге сауҡалыҡта осрашырға һөйләшкәндәрен онотоп киткән. Ә иҫенә төшкәндә, ҡараңғы төшөп килә ине. Талип ибәтәйһеҙ инде ул, тәки китте шунда. Килеп еткәс тә сауҡалыҡҡа инеп китте ныҡыш малай. Эй барҙы, бара торғас, байтаҡ ер үтте, самаға ҡарағанда яр буйына барып етергә тейеш ине. Ә юл һаман һуҙыла, тирә-яҡтағы ағастар ҙа таныш түгел, әллә ниндәй кәкре-бөкрө, ботаҡтары ла сатай-ботай. Аҙашҡан даһа! Шул саҡ тауыш ишетелде. Ул ҡыуанып, алға атылды һәм гөрт итеп йомшаҡ көрткә сумды. Сығырға тип тырмаша башлағайны, бер өңгә төшкәнен аңлап ҡалды. Бына аяҡтары таҡыр юлға баҫты, ә юл бер ишеккә алып бара. Малай ишекте асып, эскә инде, һаулыҡ һорашты, өйҙәге кешеләр әллә аңламаны, әллә ишетмәнеләр, яуап биреүсе булманы. Иҙән уртаһында бер әбей ултыра, мейес янында бер ҡатын табаҡтарҙы шатырлатып, тегеләй ҙә былай шылдыра. Бер мөйөштә ултырған малай ҡулындағы ҡатҡан тире киҫәгенә ҡарай ҙа: "Аш-шаҡҡа, аш-шаҡҡа",-тип аҡырып ала. Туҡтаһа, икенсе мөйөштә бау ишеп ултырған ир уға ҡарай. Былар барыһы ла кешегә оҡшаш булһалар ҙа, әллә ниндәй һынлылар. Ә-ә, былар бит ен-шайтандар, бая мин ишеткән малайҙар тауышы ошо ен малайныҡы булған икән, тип уйлап, Талип тиҙерәк сығып китеү яғын ҡараны. Ләкин уны шайтан баҫтыра башланы. Оҙаҡ йүгерҙе Талип, ағас ботаҡтарына эләгеп, бите һыҙырылып бөттө. Ниһәйәт, таныш аҡланға сыҡты ла, ундағы ҡарбабайға бәрелеп, йығылып китте. Ә шайтан етеп килә, Талип торорға тип, ҡулдарына таянғанда уң ҡулы бер йомшаҡ нәмәгә тейҙе, сараһыҙҙан ошо әйберҙе алып шайтанға һелтәнде, көтмәгәндә шайтан артҡа сигенде лә, ҡуҡып кире сапты. Ҡулындағы был нәмәнең тылсымға эйә булыуын аңлап, ҡаланың бейек кранынан аҡланға төшөп торған яҡтылыҡта һәйбәтләп ҡараны. Ап-аҡ йөндән бәйләнгән бәләкәй генә бейәләйҙәр икән.

Ошо көндән башлап һәр көн дәрестән һуң аҡланға бейәләйҙәрҙе тотоп килеп, уларҙың эйәһен көтөргә булды Талип, бер килмәһә, бер килер әле, тип өмөтләнде. Үҙендәге ыңғай яҡҡа үҙгәрешкә аптырап ҡуйҙы. Элек бит ул юлда ятҡан әйберҙе алыу түгел, киреһенсә, типкесләп китә, ә ҡарбабай күрһә, боҙмайынса үтә алмай ине. Бисмилла шулай һаҡлай ҙа, тәрбиәләй ҙә инде ул...

Таңсулпан

Кала ситендәге сауҡалыҡта Таңсулпан әхирәттәре менән йөрөгәндә өләсәһе бәйләп биргән бейәләйҙәрен юғалтып ҡайтты. Шундағы аҡланда яҙғы йомшаҡ ҡарҙан ҡарбабай өйгәндә һыуламаҫ өсөн бейәләйҙәрен сисеп торғаны иҫендә. Кеҫәһенә яҙа һалған, ахырыһы. Сәй эсеп, йылынып алғас, әсәһе менән бейәләйҙәрҙе эҙләп, аҡланды ҡарап килергә булдылар. Йәйәү йөрөр юл яр буйына тиклем тура ғына тапалған. Әсә менән ҡыҙ юғалған бейәләйҙәрҙе икәһе ике яҡҡа китеп эҙләргә булды. Ҡар шундай йомшаҡ, аяҡтар бата, быймаларға ҡар тула. Ә сауҡалыҡта шундай тынлыҡ, бер кем юҡ, кискә табан кем йөрөһөн инде.

Алағарайҙа ҡараңғы ҡапыл төшә. Таңсулпан ярты юлды үтеүгә, күҙ бәйләнгәйне инде. Ни күҙе менән күрһен, һул яҡтағы ҡары иреп, ҡара ере асылған бәләкәй генә аҡлансыҡта сып-сыбар кейенгән бер ҡатын торасы. Иңенә суҡтары елберҙәп торған ҙур аҡ шәл һалған, хатта сихырсыға оҡшаған. Бар көсө менән ҡыҙыҡай алға ынтылды һәм йыуан, бәләкәй генә буйлы бер ҡартты күрҙе, ул ҙур аҡ эшләпә кейгән, мут йылмайып, ағастар араһынан Таңсулпанға ҡарап тора. Юл ситендә әллә айыу ята инде. Юҡ икән дә, бер йыуан бүрәнә булып сыҡты. Инде былай ҙа ҡурҡып барған Таңсулпандың арҡаһынан кемдер һыйпаны, ул "Әсәй!" тип ҡысҡырып ебәрҙе. Әсәһе: "Таңсулпан, ҡурҡма, мин бында бит",-тип ҡысҡырҙы. Осрашҡас, Таңсулпан әсәһенә күргәндәрен һөйләп бирҙе. Әсәһе ҡыҙын ҡосаҡлап һөйҙө лә:

-Балаҡайым, ҡурҡҡанға ҡуш күренә, тип әйтәләр. - "Сихырсы ҡатын" тигәнең суҡтарын елберләтеп торған аҡ ҡайын ул. Ҡартҡа оҡшағаны - ағас тәбөндәге ҡар инде. Арҡаңдан һыйпағаны - ағас ботағы. Өләсәйең "Бисмилла" тип әйтеп кенә бәйләгән бейәләйҙәреңде юғалтҡанға ла, бәлки, теге зыянһыҙ нәмәләр ҙә теләһә нәмә булып күренәләрҙер, - тип әйтеп ҡуйҙы.

Флора БИКЕМБӘТОВА.

✓ *Мәкерле солохҡа ҡул ҡуйылғас, ул яҡын-тирәләге иң күренекле башҡорттарҙы ҙур мәжлескә саҡырып, эсереп, ҡайһыларын үлтереп, бәғзеләрен ҡул-аяҡтары бәйле килеш башҡорт комиссияһына оҙатҡан.*

ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

ИВАН ЛЕПЕХИН СӘЙӘХӘТНАМӘҺЕ,

йәки XVIII быуаттағы башҡорт донъяһына бер ҡараш

Беҙ ҡышлаған Табын ҡалаһы Нуғай юлы башҡорттарының Кесе Табын олоҫонда, Ағиҙел йылғаһының таулы уң яҡ ярында, уға Усолка йылғаһы ҡойған урында төҙөлгән. Өфө ҡалаһынан бында тиклем туҡһан саҡырымлап булыр, ә Ырымбурҙан ике йөҙ иллеләп самаһы. Ошо ҡаласыҡҡа башланғыс биргән тоҙло шишмәләр хәҙерге Табын йортонан 12 саҡырымда урынлашҡан. Балахон сауҙагәре Иван Утятников ошо урында тәү башлап тоҙ ҡайната башлаған, быны Соловарный ҡаласығы исемендә хәтерләйҙәр. Уның ысынлап та нығытмалары булып, әлеге Утятниковтың үҙенә һәм янындағы кешеләренә 1735 йылда баш күтәргән башҡорттарҙың һөжүменән һаҡланырға мөмкинлек биргән. Әммә был урын өҫтөнлөк итеүсе башҡорт көстәренә ҡаршы тороу өсөн бигүк ышаныслы булмағанлыҡтан, Утятников Табындан биш саҡырым алыҫлыҡта, тау итәгендә Вознесенск тип исемләнгән ҡаласыҡҡа нигеҙ һалған. Был урын ер валы һәм ҡойма менән нығытылған, һәм ошо нығытмала башҡорттарҙан ҡасып ултырған Утятников баш күтәреүҙе туҡтатыу өсөн мәкер ҡулланған. Ул Рәсәй Дворынан рөхсәт алдым, тип хәйләләп, башҡорттар менән солох килешеүҙәре төҙөүгә өлгәшә. Мәкерле солохҡа ҡул ҡуйылғас, ул яҡын-тирәләге иң күренекле башҡорттарҙы, шул иҫәптән төп ихтилалсы Килмәк Абызды ла ҙур мәжлескә саҡырып, эсереп, ҡайһыларын үлтереп, бәғзеләрен ҡул-аяҡтары бәйле килеш башҡорт комиссияһына оҙатҡан.

Ҡаласыҡта кеше аҙ булып, насар төҙөлһә лә, был урын шундай иркен һәм матур, бында ҙур ҡала торһа ла оят булмаҫ ине. Табын йорто урынлашҡан киң үҙәндә баҫыуҙар бик уңдырышлы. Ағиҙел һәм Усолка ярҙарындағы бай туғайҙар малсылыҡ өсөн бик иркен. Тигеҙлектә уратып алған, урман менән ҡапланған йыраҡтағы тауҙар күҙгә йәм биреп, уҫал бурандарҙан ышыҡлап тороуҙан башҡа, төҙөлөшкә һәм башҡа ихтыяжға ярашлы ағас бирә.

Ҡала янынан ағып ятҡан ике йылға эсәр һыуҙан башҡа күңелле һәм килемле булған балыҡсылыҡ менән шөғөлләнеү мөмкинлеген бирә: Кама йылғаһына ҡойған Ағиҙелгә йәйен, ағасъяҡаҡ, ҡылыс балыҡ, подуст кеүек төрлө балыҡтар күпләп килеп инә; ҡомло урындарҙа ташбаш, этеш күп; бикре, сөгә, шулай уҡ һөмбаш балыҡтары һирәгерәк осрай, сөнки улар Өфө ҡалаһы янында Ағиҙелгә ҡойған Өфө йылғаһына үтеп китә. Ҡыш көндәрен Табын казактары өсөн күлдәр иң яҡшы балыҡ тотоу урыны булып тора, уларҙың икеһе Табын ҡалаһыныҡы булып, ҡаланан ете саҡырымдар тирәһендә Ағиҙел йылғаһының туғайлы яғында урынлашҡан. Уларҙың Аҡкүл тип аталғаны бик тәрән һәм балыҡлы; ҡорман, суртан, сабаҡ һәм табан балыҡтарының күп булыуынан башҡа үҙенең ҙурлығы менән дә билдәле: оҙонлоғо һигеҙ саҡырымға етһә, киңлеге урыны менән бер саҡырымдан да ашып китә. Тәүгеһенән ярты саҡырым алыҫлыҡта ятҡаны Күккүл исеме менән билдәле, ул әйләнәһенә саҡырымдан ашыу булмаған ерҙе биләп ята. Был ике күл ер аҫтынан бер-береһе менән тоташҡан икән, тип һөйләйҙәр.

Табын ҡалаһы бар яҡтан да төрлө йыртҡыстарға төйәк булған урманлы тауҙар менән уратылып алынһа ла, уларға һунар итеү ҡала кешеләрен артыҡ ҡыҙыҡһындырмай. Был яҡынтирәләге башҡорттар шөғөлө булып ҡала, ә улар, дала халыҡтарына хас булғанса, йәнлек аулауға бик әүәҫ. Ошо йәһәттән улар әллә ниндәй хәйлә ҡороп тормай, тик үҙҙәренең етеҙлегенә һәм уҡ атыу маһирлығына таяна. Ҡыш етеретмәҫтән үк, йәғни беренсе ҡырпаҡ ҡар яуыу менән йәш башҡорт егеттәре, йорттарын ҡалдырып, үҙҙәренең йыраҡ биләмәләрендәге урмандарға сығып китә. Улар төрлө төркөмдәргә (артелдәргә) бүленә, туған-тыумаһы менән тейен, осар тейен кеүек ваҡ йәнлектәр аулай. Тауҙарҙа аҙ булмаған болан, мышы кеүек ҙурыраҡ хайуандар осраһа, ҙур төркөмдәргә тупланып, ҡайһы саҡта аҙна буйына бер боланды ҡыуып йөрөйҙәр; тотҡан йәнлекте бер тигеҙ итеп бүләләр, йыш ҡына һәр ҡайһыһына бәләкәй генә ит киҫәге әләгә. Бындай табыштың әһәмиәтһеҙ, бәлки, кемдер өсөн көлкөлө булып та тойолоуы бар, сөнки йәнлекте оҙаҡ баҫтырып йөрөп, йыш ҡына үҙҙәренең аттарын яндырған осраҡтары була: әммә уларҙы бер ҡуян өсөн аҡсаһын да, хатта һаулығын да йәлләмәгән билдәле бай сифатында ҡарарға кәңәш итер инем. Йәнлек аулауҙың, йәғни башҡорт һунарының иң мөһиме ҡырғыҙ **(ҡаҙаҡ. - Ред. иҫк.)** далаһында башҡарыла, улар унда Ырымбур губерна идараһы рөхсәтен алып, ҙур төркөмдәр менән бара; ул саҡта йыш ҡына башҡа ваҡ-төйәк менән бергә үҙҙәре менән менгегә өйрәтелгән тарпандарҙы көтөүе менән ҡыуып алып ҡайталар.

Табын янындағы урмандарҙа һәм, гөмүмән, Уралда йәнлектәрҙән ҡуян, үрғуян, айыу, бүре, төлкө бик күп , яҡын-тирәләге далаларҙа көҙән, аҫ, йәтсә осрай; тауҙарҙа ябай һәм ҡара ҡарабыштар, йәғни йомрандар күп. Уларҙың ап-аҡ булғандары ла осрай, тип һөйләйҙәр, әммә миңә уларын күргергә тура килмәне; киреһенсә, сыбар төҫтәгеләре иҡәү булды, уларҙың аҡ йөнлө урындары ҡаралары менән төрлөсә сиратлашып килә: мороно, тәпәйҙәре, ҡойроҡ осо, ҡорһаҡ аҫты, муйыны һәм алғы ҡалаҡ һөйәге тирәһе, шулай уҡ нигеҙгүҙе аҡ йөн менән ҡапланған булһа, ҡалған ерҙәре ҡара була. Уларҙың береһенең тирәһе бәләкәй таптар менән сыбарланып, аҡ төҫкә яҡыныраҡ ине.

Һирәгерәк булһа ла, Уралдан ағып сыҡҡан йылғаларҙа ҡондоҙ осрай. Бейек тауҙарҙа болан күп, ә урмандарҙа мышылар ҙа йәшәй. Был яҡтарға осоп килеүсе ҡыр ҡаҙҙары, аҡҡош, торна һәм өйрәктәрҙең төрлө төрҙәре, ҡырағай әтәс һәм көйөлдө кеүек ҡоштарҙан башҡа, бөркөт, ыласын, ҡарсыға, өкөләрҙең төрлө төрҙәре байтаҡ, араларында аҡ төҫлөләре лә осрай; ҡор, һуйыр, мышар турғайы, ҡарабаш турғайының төрлөләре, Европа тумыртҡаларының бар төрҙәре, үрмәлсек турғай, суҡ турғай, йәғни бараба, кедр турғайы, әйләнсек күгәрсен һәм башҡа бар ерҙә лә була торған ҡәҙимге ҡоштар бар. Табын ҡаласығын уратып алған тауҙар, башлыса ябай таштарҙан тороп, Урал армыттарына хас булғанса, бик гүзәл үҫемлектәр менән ҡапланған. Бар тауҙар таштарҙың иң яҡшыларынан һаналған гипс менән тулы. Шул йомшаҡ таштың яҙғы һыуҙар менән йыуылыуы һөҙөмтәһендә Табын тирәһендә төрлө мәмерйәләр хасил булған...

Табын ҡаласығынан ун ике саҡырым ерҙә урынлашҡан тоҙло сығанаҡтар шулай уҡ иғтибарға лайыҡ. Көнсығыштан һәм көнбайыштан бейек тау һырттары менән уратып алынған үҙәндә ошондай шишмәләр бик күп. Уның уртаһынан Усолка исемле бигүк бәләкәй булмаған йылғасыҡ ағып ята, ул, ҡайһы берәүҙәр яҙғанса, тоҙло шишмәләрҙән түгел, 30 саҡырымлап алыҫлыҡтағы тауҙарҙан башлана. Шишмәләргә яҡын ерҙә Усолкаға төшкөлөк яғынан Йырмыш тип аталған бәләкәй ҡушылдыҡ ҡоя. Ә тоҙло шишмәләр күбеһенсә көнбайыш һырттан ағып сыға. Улар хәҙер утыҙҙан ашыу, ә элегерәк өсәү генә булһа ла, ҙур сығанаҡтарҙан һаналған: белмәйем, ниндәйҙер "аҡыллы" баш уларҙы үҙе өсөн хәүефле, тип иҫәпләп, мөмкин булғанса ҡаплап, баҫырып ҡараған; һөҙөмтәлә өс сығанаҡ урынына байтаҡҡа күберәк яңы шишмәләр барлыҡҡа килгән. Шул тоҙло шишмәләр ҡасандыр файҙа алыу өсөн ҡулланылған... Әммә Утятниковтан һуң башҡа бер кем дә уларҙы файҙаланыу тураһында уйламаған һәм шишмәләр бөтөнләйгә иғтибарҙан ситтә ҡалдырылған. Тик башҡорттарҙың йылҡы өйөрҙәре генә ошо тоҙло һыуҙы шул тиклем яратып эсә, хатта ки улар өсөн нектарға тиң эсемлек менән һыуындарын ҡандырыр өсөн ҡайһы саҡта тәүлектәр буйы ошонда тиклем сабып килә...

(Дауамы. Башы 21-се һанда).

ВӘЛИДИ КӨРӘШТӘШТӘРЕ

ШАҺИБӘК ҮЗБӘКОВ

Шаһибәк Үзбәков - Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтендә әүҙем ҡатнашҡан башҡорт офицерҙарҙың береһе, Әхмәтзәки Вәлидиҙең яҡташы, остазы һәм дуҫы. Өфө губернаһы Стәрлетамаҡ өйәҙенең (хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Ишембай районы) Әхмәр ауылында тыуған.

Стәрлетамаҡ ҡалаһында рус мәктәбен тамамлай, артабан Көҙән ауылында Вәлидиҙең атаһы Әхмәтшаһ мулланың мәҙрәсәһендә уҡыта. Ошо осорҙа (1901 йылдар тирәһендә) Шаһибәк Үзбәков З. Вәлидигә урыҫ теленән һабаҡтар бирә. Артабан Үтәк мәҙрәсәһендә лә Вәлиди Ш. Үзбәков ҡулы аҫтында уҡый. "Атайымдың мәҙрәсәһендә уҡытҡан Шаһибәк Үзбәков тә олатайымдың мәҙрәсәһенә күсте. Мин унан русса өйрәнеүемде дауам иттем...", - тип яҙа Вәлиди үҙенең хәтирәләрендә.

Беренсе донъя һуғышы башланғас, Ш. Үзбәков хәрби хеҙмәткә алына. Бында ул хәрби мәктәп тамамлап, офицер званиеһы алып ҡайта.

1918 йылдың июнендә Шәһибәк Үзбәков яҡташтары - офицерҙар Ғәбделбарый Ғәмбәров һәм Сөләймән Ишмырҙин менән бергә Өфөгә Һамар хөкүмәтенең Халыҡ армияһына мобилизациялана. Артабан Башҡорт хәрби шураһы юллауы менән улар Башҡорт армияһы сафына күсерелә.

1918 йылдың 14 сентябрендә поручик Үзбәков Табын кантонының ирекле отряды начальнигы итеп тәғәйенләнә. Артабан ул Башҡорт ғәскәри идарлығында Зәки Вәлидиҙең өлкән адъютанты вазифаһын башҡара.

1918 йылдың ноябрендә хәлдәр ҡатмарлашып китә, Колчак үҙенең фарманы менән Башҡорт корпусын дивизия кимәленә ҡалдыра. Дивизияға командир итеп урыҫ офицерын ҡуйҙырта. Зәки Вәлиди 14 декабрҙә фронттағы башҡорт офицерҙары һәм полк муллаларына яҙған йәшерен хатында башҡорт полктарын бер урында тупларға тигән бурыс ҡуя һәм дивизия менән етәкселекте Шаһибәк Үзбәковҡа тапшырырға ниәтләй. Хатта былай тиелә: "...Не надо идти дальше, мотивируя это тем, что вы ждете 4-й и 5-й полки; когда они прибудут, опять не двигайтесь с места. Когда закончится сбор всех войск, я дам специальное распоряжение отступить...Однако, если до моего распоряжения большевики начнут наступление, не оказывая больше сопротивления, необходимо отступать. Если начальник дивизии генерал Савич-Заболоцкий выйдет в отставку в Уфу, буду поручать Шайбеку Узбекову отступить с соответствующей дивизией ".

Бер йоҙроҡҡа тупланған башҡорт полктары 1919 йылдың ғинуарында Зәки Вәлидиҙең фарманы менән яңынан Башҡорт корпусына берләштерелә. Ғинуар аҙағында Башҡорт хөкүмәте большевиктар менән һөйләшеүҙәр башлай. Февраль башында Советтар яғына сығырға тигән ҡәтғи ҡарарға килә. Зәки Вәлиди был ҡарарҙы командирҙарға иғлан итә: "Офицерҙарҙы йыйҙым. Күсергә теләмәүселәр булһа, мәжбүр итмәйем, ундайҙарҙы бер айлыҡ жалованиеларын, ат һәм ҡоралдарын биреп, үҙҙәре теләгән аҡ генералдарға ебәрәм, тинем, - тип яҙа Вәлиди. - Ныҡ яҡын күргән арҡадаштарымдан Шаһибәк Үзбәков, Ғәни Ҡарамышев, Исмәғил Шәрипов һәм башҡа ҡайһы берәүҙәр рөхсәт алып киттеләр... Шаһибәк менән йәш саҡтан дуҫ инек. Бик яҡшы, аҡыллы һәм ҡыйыу кеше булыу менән бергә, үтә үҙ һүҙле ине. Яҡшы белемле офицер булғас, хәрби эштәр теорияһы менән шөғөлләнерме тип өмөт иткәйнем. Тиҫкәреләнде, унан да баш тартты...".

Шаһибәк Үзбәков Колчак армияһында үҙенең полкы менән кире аҡтарға сыҡҡан Муса Мортазин менән бергә ҡыҙылдарға ҡаршы һуғыша. 1919 йылдың июнендә М. Халиҡов: "По сведениям помполитпреда Фахретдинова, двумя башкирскими отрядами Узбеков и Муртазин действуют против 20-й дивизии, всего тысяча штыков...", - тип Вәлидигә хәбәр итә. Август айында Колчак армияһы Башҡортостандан сигенә башлай. Мортазин үҙ бригадаһы менән ҡабат ҡыҙылдар яғына сыға. Зәки Вәлиди яҙыуынса, Шаһибәк Үзбәков, Урал казактары менән Украинаға китеп, генерал Врангель ғәскәрендә хеҙмәт итә. "Аҙаҡ, Ҡырымда яраланып, Истанбулға килеүе һәм шунда вафат булыуы хаҡында ишеттем", - ти Вәлиди.

Азат ЯРМУЛЛИН.

МИЛЛӘТ ИДЕЯҺЫҘ

тик ул идея

Быйыл беренсе мәртәбә III Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы менән бергә I Башҡорт йәштәре ҡоролтайы ла уҙғарыласаҡ. Ошо ваҡиғалар айҡанлы башҡорт йәштәренең тормошо, маҡсаттары, донъяға ҡарашы тураһында БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай эргәһендәге Йәштәр Палатаһы рәйесе урынбаҫары Искәндәр ЮЛДАШЕВ, "Молодежь за трезвую Россию" Бөтә Рәсәй ойошмаһының Башҡортостандағы рәйесе Марат АБДУЛЛИН, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы янындағы Йәштәр советы рәйестәше Тимур ЛОҠМАНОВ менән әңгәмә ҡорҙоҡ.

▸ Ҡоролтай кеүек ҡорҙа башҡорт халҡының иң арҙаҡлы, алдынғы ҡарашлы кешеләре, ил ағалары, ил инәләре - өлкән буыын ҡатнаша, фекер алыша. Ә бына III Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайын әҙерләгәндә, делегаттарҙың 30 проценты йәштәр булырға тейеш, тигән шарт ҡуйылды. Быны бик ваҡытлы һәм мөһим ҡарар, тип баһалап булалыр…

Т. ЛОҠМАНОВ: 2002 йылдан алып Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты эргәһендә Йәштәр советы эшләп килә. Йәштәр советының иң тәүге киңәйтелгән ултырышы 2005 йылда үтте, унда төрлө төбәктәрҙән башҡорт йәштәре лидерҙары ҡатнашты. 1989-1990 йылдарҙа совет заманында формалашҡан йәш лидерҙар суверенитет яулауҙа ҡатнашһа, һуңғы 20 йыл эсендә яңыса фекер йөрөткән, үҙенең маҡсаттарын тормошҡа ашыра белгән, үҙенсәлекле ҡараштары булған йәштәрҙең яңы тулҡыны барлыҡҡа килеүен билдәләп үтергә кәрәк. Ил хәстәрен үҙ иңенә алырлыҡ белемле, рухи яҡтан ныҡлы, өлкән буыынға лайыҡлы алмаш булырлыҡ был егеттәр һәм ҡыҙҙар бер нисек тә милләт мәсьәләләре ҡаралған оло ҡоролтай эшенән ситтә ҡала алмай. Ғөмүмән, оло ҡоролтай менән бергә үтәсәк Йәштәр ҡоролтайына ҙур өмөттәр бағлайбыҙ. Әлеге ваҡытта Рәсәйҙең төрлө субъекттарынан, башҡа төбәктәрҙән ҡунаҡтар көтәбеҙ һәм улар менән Йәштәр ҡоролтайында аралашыу мөмкинлеге киләсәктә йәштәр хәрәкәте үҫешенә ҡеүәт бирерлек бер аҙым булыр ине. Алдынғы ҡарашлы йәштәрҙе бергә туплау, берләштереү йәһәтенән бик уңайлы буласаҡ был сара. Тик әйтер һүҙҙәргә кәртә, тыйыу ғына булмаһын. Цензура ҡоролтайҙы формаль сараға әйләндерәсәк.

М. АБДУЛЛИН: Был ҡоролтайҙан нимә көтәм һуң? "Киске Өфө"нөң һуңғы һандарында Фәнзил Әхмәтшин ул фекерҙе яңғыратты инде: халыҡҡа, йәштәргә бер нисә йылға иҫәпләнгән ниндәйҙер стратегик пландар булдырғанда, Ҡоролтай ышанысташы аҡлаясаҡ. Планһыҙ, йәғни маҡсатһыҙ эш атҡарыу - ул ҡомдан йорт һалыу менән бер.

Мин шулай уҡ был Йәштәр ҡоролтайында йәмғиәтебеҙҙә тамыр йәйә барған алама күренештәр, насар ғәҙәттәр тураһында уртаға һалып һөйләшенер, уларҙы хәл итеү буйынса аныҡ тәҡдимдәр индерелер, тип ышанам. Мәҫәлән, эскелеккә ҡәтғи рәүештә ҡаршы көрәшкә сығыуҙы һуҙа киләбеҙ, ә был бит халҡыбыҙҙың башҡа бихисап проблемаларын тыуҙырыусы сәбәп булып тора. Аналитиктар билдәләүенсә, йәмғиәттә, кеше башына йылына уртаса 1 литр абсолют хәмер эселә икән, был йәмғиәттең интеллектуаль-инновацион мөмкинлектәре юҡҡа сыға. Йәғни, ул үҙенең тормошо менән үҙе идара итмәй, ә сит көстәр ҡулында уйнаусы ҡурсаҡҡа әүерелә. Зыялы хатта ике-өс аҙнаға бер бокал ғына шампан шарабы эсһә лә бер ниндәй ҙә яңы идея тәҡдим итә алмай, ә ҡалыплашҡан, күнегелгән эштәрен генә башҡара.

Халҡыбыҙ араһында киң таралған суицид осраҡтарының 95 проценты хәмер эсеү менән бәйле. Әбйәлил районы буйынса һуңғы бер нисә йыл суицид статистикаһын анализланым - ғүмерен өҙөүселәрҙең барыһы ла тиерлек был аҙымға иҫерек килеш барған. Үлтереүҙәр, урлашыуҙар, көсләүҙәр, айырылышыуҙар, хатта эшһеҙлектең нигеҙендә хәмер ята, тип ышаныс менән әйтергә мөмкин.

Йәштәр ҡоролтайында делегаттар алкоголь буйынса ил һәм республика етәкселегенә айырым концептуаль мөрәжәғәт ҡабул итәсәк. Иманым камил, шулай аҙымлай барып, бер нисә тиҫтә йылдан хәмер океанын - диңгеҙгә, диңгеҙҙе - күлгә, күлде күләүеккә әйләндереп, ҡоротоп та ҡуйырбыҙ, сөнки тик айыҡ булғанда ғына башҡорт халҡының киләсәге буласаҡ.

И. ЮЛДАШЕВ: Оло Ҡоролтай янында Йәштәр ҡоролтайы уҙғарыу бик мөһим һәм кәрәкле сара. Әгәр ҙә бөгөн үткән быуатты ҡайтарырға һәм быны БДУ-ға ғына түгел, ә бөтә уҡыу йорттарына ла индерергә кәрәк, был саҡта беҙҙең милләт балалары араһынан юғары уҡыу йортона уҡырға инеүселәр күберәк буласаҡ. Әгәр ҙә бала туған теленән имтихан бирә алмай икән, телебеҙҙең дәүләт теле булып иҫәпләнеүенән ни файҙа? Мин ошо мәсьәләне Йәштәр ҡоролтайында күтәреп сығасаҡмын һәм башҡорт теле буйынса имтиханды рус теленән тапшырылған БДИ-ға тиңләүҙәрен талап итеп, РФ Мәғариф министрлығына мөрәжәғәт ҡабул итәсәкбеҙ.

▸ Оло быуын эшмәкәрҙәре, вәкилдәре баҙнат итмәгән, йә булмаһа, улар иғтибар итмәгән мәсьәләләр ҙә барҙыр. Улар йәштәр тарафынан нисегерәк ишеттереләсәк?

И. ЮЛДАШЕВ: Әлбиттә, бар. Мәҫәлән, күрше субъекттар, шул уҡ Татарстан, Саха-Яҡут, Ҡалмыҡ республикаларын алһаҡ, улар үткән быуаттың аҙаҡтарында уҡ үҙҙәренең йәштәрен сит илдәрҙә, Мәскәүҙең иң алдынғы уҡыу йорттарында уҡытты. Һәлләтле йәштәрҙе ситкә ебәреп уҡытыу беҙҙең республикала әле башланып ҡына тора. Әгәр ҙә беҙ шул рәүешле Европа һәм донъя кимәлендәге белгестәр әҙерләмәһәк, Башҡортостан менән идара итеү механизмы артына беҙҙең башҡорт егеттәре түгел, башҡалар ултырасаҡ.

Т. ЛОҠМАНОВ: Йәштәрҙе дәүләт программаһы буйынса уҡырға ебәреү республикала былтыр ғына башланды һәм был башланғыс быйыл да дауам итерме икән, тигән һорау бар. Иғтибар итегеҙ: былтыр был программа буйынса сит илгә уҡырға киткән 35 кеше араһында инглиз телен яҡшы белгән 31 башҡорт милләтле йәш кеше бар ине.

Бер нисә аҙна Санкт-Петербургта эшләп ҡайтырға тура килде. Иң үкенеслеһе шул: был ҡалала үҙ эшен асҡан башҡорт эшҡыуарҙары юҡ кимәлдә. Шул уҡ ваҡытта төрлө диаспоралар менән осрашҡан мәлдә шул күҙгә ташланды: башҡа милләт вәкилдәре үҙ иленән ситтә лә бик лайыҡлы йәшәйҙәр. Бер бүрәт егете менән таныштым. Ул 27 йәштә, аспирантурала уҡый, бәләкәй булһа ла үҙенең ҡунаҡханаһы бар. Бүрәттәр Рәсәйҙә 400 мең, башҡорттар - 1 миллион 700 кеше, әммә Санкт-Петербург ҡалаһында уңышлы эшҡыуар һаналған шул уҡ бүрәттәр беҙҙән күберәк. Мәскәү ҡалаһында эшлекле егеттәребеҙ байтаҡ ҡына - быныһы ҡыуандыра, әлбиттә. Әммә шуныһы: сит ҡалаларҙа йәшәп, эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнеүсе милләттәштәребеҙгә Башҡортостандан ярҙам юҡ. Ул егеттәр-ҡыҙҙар республикала эш булмау, һ.б. сәбәптәр арҡаһында ситтә йөрөһәләр ҙә, башҡорт булыуҙан туҡтамай, Мәскәүҙә йәки башҡа ерҙә йәшәһәләр ҙә, үҙ халҡына хеҙмәт итеүҙе дауам итә. Кемдер милли йәкшәмбе мәктәбе, балалар баҡсаһында башҡорт төркөмдәре аса, милли байрамдар үткәрә, һ.б.

И. ЮЛДАШЕВ: Тағы бер хәл итә торған проблеманы әйтеп китергә кәрәк: беҙҙә йәмғәт ойошмалары күп, әммә граждандар йәмғиәте тигән төшөнсә барлығы бер кемдең дә иҫенә инеп сыҡмай. Граждандар йәмғиәтенең бер билдәһе - йәмәғәтселек фекерен белдереүсе йәмәғәт ойошмалары булдырыу. Әгәр ҙә бөтә йәмәғәт ойошмаларын экстремистик тип атай башлаһаҡ, беҙ граждандар йәмғиәтенә үҫергә ирек бирмәйбеҙ булып сыға. Законға ҡаршы булыу түгел, ә уға ҡарашыңды белдереү РФ Конституцияһы тарафынан тыйылмаған. Ошо ҡаршылыҡты еңеү өсөн матбуғат сараларына йәмәғәт ойошмаларын, уларҙың эшмәкәрлеген йышыраҡ яҡтыртыу кәрәк, ул саҡта оппозицион матбуғат саралары уларҙы экстремистик тип атай алмаҫ ине. Ә башҡорт матбуғат саралары йәмәғәт ойошмаларының барыһының да эшмәкәрлеген сағылдырмай, уларҙың ҡарашын күрмәмешкә, ишетмәмешкә һалыша.

▸ Тимур Мәскәү, Санкт-Петербургҡа белем алырға китеүсе йәштәребеҙ тураһында әйтеп үтте. Әммә ситкә китеп белем алыусыларға республикала ҡараш бигүк ыңғай ҙа түгел һымаҡ. "Барыбер шунда тороп ҡала бит улар", тип, йәштәрҙе, мәҫәлән, сит илгә уҡырға китеүҙән тыйыусылар ҙа юҡ түгел…

Т. ЛОҠМАНОВ: Йәштәрҙең белем алыу мөхитен киңәйтергә кәрәк, сөнки башҡорт йәштәре Азия, Яҡын Көнсығыш, Европа, Америка илдәре менән тура бәйләнешкә инә алһа ғына башҡорт халҡын танытып буласаҡ. Шуның өсөн дә Башҡортостандың сит илдәр, әйтәйек, Ҡытай, Төркиә һ.б. менән бәйләнешен нығытыу мөһим. Был йүнәлеш буласаҡ башҡорт кадрҙарын әҙерләүҙә иң әһәмиәтле сараларҙан булырға тейеш, сөнки гел генә Мәскәүгә ҡарап тора алмайбыҙ ҙа инде, беҙҙең үҙебеҙҙең тарихыбыҙ, дәүләтселегебеҙ, суверенитетыбыҙ бар.

М. АБДУЛЛИН: Өфөләге Әбйәлил йәштәре берлеге етәксеһе Айтуған Фәттәхов яңыраҡ 16 ил йәштәре араһында уҙғарылған социаль проекттар конкурсында беренсе урын алып, Ҡаҙағстанға Халыҡ-ара йәштәр форумына барып, ҡаҙаҡ халҡының һәм Астананың үҫеш форматына аптырап ҡайтты. Быға самолетҡа ла ултырып ҡарамаған ябай башҡорт егетенең сит илгә барып, үҙ проектын 16 ил йәштәренә күрһәтеүе - башҡаларҙың беҙҙе лә тыңларға әҙер булыуын дәлилләй. Әгәр ҙә беҙҙең башҡорт йәштәре үҙ ҡаҙанында ғына ҡайнап ятһа, уларҙың үҫеш мөмкинлектәре сикле буласаҡ, шуның өсөн төрлө форумдарға ла йөрөргә тырышырға кәрәк.

И. ЮЛДАШЕВ: Сит ерҙәрҙә үткән форумдарҙа ҡатнашырға кәрәк тә, тик дәүләт бының өсөн йәш кешегә ярҙам итеп бармай. Ғөмүмән, башҡорт йәштәренең үҫешенә дәүләттең иғтибарлыраҡ булыуы фарыз, был етешһеҙлектән ҡотолорға ваҡыт.

Бөгөн күп мәсьәләләр үҙенең хәл ителешен көтә. Мәҫәлән, элегерәк юғары уҡыу йортона уҡырға ингәндә теләк буйынса рус теле урынына башҡорт теленән имтихан бирергә мөмкинлек бар ине. Бөгөн абитуриенттарҙың бындай хоҡуғы юҡ, сөнки федераль ҡарамаҡтағы вуздар быны эшләй алмай. Улай ғына түгел, хәҙер башҡорт балаһы мәктәпте тамамлағанда уҡ тик рус теленән генә Берҙәм дәүләт имтиханы тапшырырға мәжбүр. Шулай ҙа был уҡыу йорттары барыһы ла Башҡортостанда, беҙҙең еребеҙҙә урынлашҡан, тимәк, республикабыҙҙа башҡорт теле дәүләт теле булғас, улар башҡорт теленән имтихан ҡабул итергә тейеш.

▸ Башҡорт йәштәре айырым ҡоролтай уҙғарғас, һеҙгә лә үҙегеҙҙең етәксе аппаратты булдырып, әле күтәрелгән мәсьәләләрҙе үҙегеҙ хәл итеүгә күсергә ваҡыт еткәндер?

Т. ЛОҠМАНОВ: Киләсәктә тормошҡа ашырыласаҡ был идея, тик бында бер проблема бар: ул аппарат ниндәй булырға тейеш? Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты Мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министрлығы ҡарамағында булғанға күрә, ул уның эштәрен көйләй һәм аппаратҡа үҙенә кәрәкле кешеләрҙе тәғәйенләй. Йәштәр ойошмаһы халыҡ мәнфәғәтен яҡлаусы түгел, ә өҫтән ҡушылғанды үтәүсе органға әүерелеп китһә, был дөрөҫ булмаясаҡ. Йәмәғәт башланғысындағы аппарат төҙөгөҙ, тиер кемдер. Бөгөн урта синыф тип йөрөтөлгән үҙаллы, азат кешеләр бар, улар халыҡтың бәләкәй генә

✓ *Оло ҡоролтай эргәһендә Йәштәр ҡоролтайы үткәрелеүе, унда ҡатнашырҙай йәштәребеҙҙең булыуы, уларҙың милли идеология менән янып йәшәүе халҡыбыҙҙың киләсәге ышаныслы ҡулдарҙа буласағына ишара.*

ЙӘШӘЙ АЛМАЙ, ӘХЛАҠЛЫ БУЛҺЫН

бер өлөшөн тәшкил итә. Ҡасан беҙҙең халыҡтың 80 проценты ошо урта синыф булып, үҙ ойошмаһын үҙе тоторлоҡ кимәлгә етә, шул саҡта ғына быны тормошҡа ашырырға мөмкин буласаҡ.

М. АБДУЛЛИН: Йәшерен-батырыны юҡ, беҙҙең әлеге ойошмаларҙың күбеһе атрибутикаға ҡоролған. Флаг, гимн, футболка, бандана бар - идея юҡ. Атрибутик булмаған ойошманың нигеҙендә ниндәйҙер идея ятырға тейеш. Июнь айында III Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы үтеп китәсәк, ә райондарҙағы ҡоролтайҙар был сараға тиклем дә әллә ни эш ҡырманы, ҡоролтай үткәс тә эшләмәйәсәк, сөнки бар нәмә атрибутикаға ҡоролған. Урындағы ҡоролтай ҡағыҙҙа бар, уның хакимиәттә эшләгән етәксеһе бар, әммә уның нигеҙендә идея, стратегик план юҡ. Йәғни, аҡса ғына түгел, идея ла берләштереүсе көс була ала. Идея булһа, уның янына аҡса йәлеп итеп тә буласаҡ. Мәҫәлән, ҡыҙыҡ өсөн бер миҫал. Бер йыл Әбйәлил районынында эшләп, Өфөгә килгәс, Әбйәлил йәштәр ойошмаһы менән айыҡ тормошто пропагандалай башланыҡ. Ярты йыл эшләп киләбеҙ, ошо ябай форматта ғына яҡынса айына 30-40 мең аҡса йыябыҙ. Хәҙер Әбйәлил генә түгел, башҡа райондар, күрше төбәктәр, Мәскәүҙән дә ошо идея форматына аҡса күсерергә әҙер кешеләр бар, сөнки күрәләр: был процесс бара һәм, иң мөһиме, был процесты барыһы ла хуплай. Әгәр ҙә беҙ көслө идеяны нығытып, кәүҙәләндерә алһаҡ, аҡсаһы киләсәк.

Минең был йәһәттән ҡәтғи фекерем ошолай: бөгөн бөтә булған йәмғәт ойошмалары эшмәкәрлеген футбол уйыны итеп күҙаллаһаҡ, уйынды булдырыусы һәм уйнаусылар - беҙ түгел. Минеңсә, бөгөн альтернатив ойошмалар һәм альтернатив уйын булдырырға кәрәк. Мәҫәлән, әлеге мәлдә Өфөлә яҡташтар ойошмалары эшләп килә. Уларҙы ойоштора башлағас, милли хәрәкәттә йөрөгән ағай-апайҙар араһынан беҙгә ҡаршы төшөп, башҡорт йәштәрен айыраһығыҙ, тип йөрөүселәр булды. Әммә бөгөн ошо 16 ойошма альтернатив фекер булдырыусы, альтернатив эш форматын күрһәтеүсе булып тора. Хәҙер хатта уларҙы төҙөүгә ҡаршы булыусылар үҙҙәре был ойошмаларға таянып эшләргә мәжбүр.

▸ Үткән быуаттың 80-се йылдар аҙағы - 90-сы йылдар башында, бик тотороҡһоҙ ваҡытта башҡорт идеяһы сиктәрендә берләшкән бер төркөм йәштәр етәксе урындарға ынтылманы. Хәҙер йәштәрҙең яңы тулҡыны барлыҡҡа килә, уларҙың яңыса, айыҡ йәшәргә, халыҡты яңы кимәлгә күтура килгәйне һәм унда бер генә йәш кеше лә булмауы асыҡланғайны. Әллә ҡайҙа йыраҡ китергә кәрәкмәй, миҫал итеп БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай эргәһендәге Йәштәр палатаһын алайыҡ. Ул 35 кешенән тора, беренсе саҡырылышта унда 7 генә башҡорт милләтле кеше бар ине. Шуға ла икенсе саҡырылышта күберәк үҙебеҙҙең башҡорт егеттәрен йыйырға тырыштыҡ. Хатта ошо кимәлдә лә был турала үҙебеҙҙән башҡа ҡайғыртҡан кеше юҡ.

Мин яңыраҡ Анапала үткән "Йәш парламентарийҙарҙың Бөтә Рәсәй форумы"нда ҡатнаштым. Унда Йәштәр йәмғәт палатаһы ағзаларынан тыш, төрлө муниципалитет, өлкәләрҙән йәш депутаттар ҙа булды. Тимәк, был төбәктәрҙә йәш кешеләргә үҫергә ярҙам итеү бар. Беҙҙең республикала был йәһәттән хәл бик шәп түгел. Был мәсьәләне кем хәл итергә тейеш һуң? Башҡорт йәштәре ҡоролтайының шул һорауҙы күтәреп сығыуы ла мөһим, йәғни Башҡортостан йөҙөнә ҡара яҡмаҫлыҡ йәштәрҙе алдан уҡ әҙерләй башларға кәрәк.

М. АБДУЛЛИН: Лидерҙар араһынан буласаҡ сәйәсмәндәрҙе өлкәләрҙә эшләгән йәштәр менән таныш: уларҙың береһе - сәнәғәттә, береһе - мәҙәниәттә, өсөнсөһө тағы ла бер тармаҡта эшләһен. Шул саҡта егерме-утыҙ йылдан үҙенең идеяһын тормошҡа ашырырлыҡ көслө генә бер быуын барлыҡҡа киләсәк". Бөгөн Өфөлә шуны күрәм: бындай план төҙөү өсөн нигеҙ барлыҡҡа килде һәм был нигеҙ иманға таяна. Тап иман, әхлаҡ форматында берләшеү һәм киләсәктә үҫешеү мөмкинлеге бар хәҙер. Йәғни, әхлаҡ идеяһы һәм башҡорт идеяһы берлеге беҙҙең быуынды тоташтырыусы көс була аласаҡ. Киләсәктә иман һәм әхлаҡ глобаль диалог платформаһы объекты буласаҡ, сөнки беҙ был идея менән донъяның һәр мөйөшөнә барып мөрәжәғәт итә аласаҡбыҙ.

▸ Бөгөнгө башҡорт йәштәрен алып ҡараһаҡ, уларҙы шартлы рәүештә өс төркөмгә бүлергә була: ауыл йәштәре, студент йәштәр, ҡала йәштәре. Ауыл йәштәре үҙаллы көн күрә, улар йәмғәт эшенә йәлеп ителмәй, ҡала йәштәренең йәмғәт эшендә ҡатнашҡанынан ҡатнашмағаны күберәк. Иң алдынғыһы - вуз йәштәре, улар һәр саҡ алғы авангардта бара. Бына ошо өс төркөмдө бергә туплап, улар араһында бәйләнеш булдырыу мөмкинлеген нисек күҙ алдына килтерәһегеҙ?

М. АБДУЛЛИН: Әбйәлил районы хакимиәтендә йәштәр бүлеген етәкләгән кеше буласаҡ, райондарҙағы, ауылдарҙағы йәштәр сәйәсәте өлкәһендәге хәлде яҡшы беләм. Шуға ла Өфөгә килгәс, егеттәр-ҡыҙҙар менән кәңәшләшеп, "Әбйәлил йәштәре яҡташтар ойошмаһы" тигән атаманан "яҡташтар" тигән һүҙҙе алып ташлап, "Әбйәлил йәштәре ойошмаһы" төҙөнөк. Бөгөнгө көндә ойошманың Магнитогорскиҙа, Сибайҙа һәм Әбйәлилдең үҙендә айырым филиалы бар. Район хакимиәтендә йәштәр бүлеген етәкләүсе йәш егеттәр һәм ҡыҙҙар аҙна һайын тиерлек шылтыратып, төрлө саралар буйынса кәңәш, ярҙам һорай. Йәғни, дөйөм сараларҙа төбәк йәштәре ойошмаһы йәштәре лә, ауыл йәштәре лә, студент йәштәр ҙә, ҡала йәшәүселәр ҙә ҡатнаша. Әлеге мәлдә тағы бер уникаль проект башланыҡ: интернет биргән мөмкинлекте файҙаланып, Әбйәлил районының бер беренсе тапҡыр халыҡ-ара кимәлдә төп халыҡтар, икенсе дәүләт эсендә булыуға ҡарамаҫтан, үҙҙәренең ерҙәренә, ер аҫты байлыҡтарына, үҙбилдәләнешенә, һ.б. хоҡуҡлы, тиеп әйтелә. Ошо документ өҫтөндә эш 22 йыл буйы барған, уға ҡайһы бер дәүләттәр ҡаршы булған. Күп милләтле федерация булған Рәсәй уны ҡабул иткән ваҡытта ыңғай ҙа, кире лә тауыш бирмәгән. Документта төп халыҡтар ирекле рәүештә үҙҙәренең сәйәси статусын, иҡтисади, социаль һәм мәҙәни үҫешен билдәләй ала, тиелә. Әлбиттә, Декларация ҡабул ителде лә, шунда уҡ тормошҡа ашырыла башлаясаҡ, тип әйтеп булмай, быныңөсөн, бәлки, күп ваҡыт кәрәк булыр. Әммә Төп ерле халыҡтар тураһындағы декларация бөтөн донъя тарафынан ҡабул ителгән һәм аҙ һанлы халыҡтарға этник үҙенсәлеген һаҡлап ҡалырға мөмкинлек биргән берҙән-бер донъя кимәлендәге хоҡуҡи документ. Цивилизация күҙлегенән ҡарағанда, Башҡортостандың киләсәккә өмөтө бар, сөнки ул донъя кимәлендә үҙенә таяныс, яҡлау таба ала.

М. АБДУЛЛИН: Йәштәр менән осрашҡанда шулай тип әйтергә яратам: ваҡытында Карфаген тигән бөйөк ҡала булған. Шул осорҙа Рим сенаторы Катон Сенат ултырыштарында: "Карфаген емерелергә тейеш!" тип әйтергә яратҡан. Һәм ул юрағанса, Карфаген ҡолаған. Бөгөнгө күҙлектән ҡарағанда, Карфаген - ул хәҙерге ваҡыттағы әхлаҡһыҙ көнбайыш, Голливуд, әхлаҡһыҙ фильмдар, поп-музыка. Әммә Карфаген ҡасан да булһа емереләсәк. Халыҡты идеяһыҙ йәшәй ала, тип уйларға ярамай. Халыҡҡа ул ҡабул итерлек идея һалынырға, тик ул идея әхлаҡлы булырға тейеш. Бөгөн "Киске Өфө" гәзите һымаҡ баҫмалар, халыҡты әхлаҡҡа өндәүсе, артынан эйәртеүсе бер төркөм кешеләр бар, тимәк, киләсәккә өмөт һүнергә тейеш түгел.

Мин патриотик тойғолар менән үҫкән кеше булараҡ, халҡымдың мәнфәғәттәрен донъя кимәлендәге хоҡуҡи белемдәрҙе ҡулланып яҡларға, тигән теләк менән юрист булырға хәл иттем. Бөгөн мин милләтемдең киләсәге яҡты буласағына ышанам. Ни өсөн тиһегеҙме? 2007 йылда БМО-ның Генераль Ассамблеяһы тарафынан Төп ерле халыҡтар тураһында декларация ҡабул ителде. Унда беренсе тапҡыр халыҡ-ара кимәлдә төп халыҡтар, икенсе дәүләт эсендә булыуға ҡарамаҫтан, үҙҙәренең ерҙәренә, ер аҫты байлыҡтарына, үҙбилдәләнешенә, һ.б. хоҡуҡлы, тиеп әйтелә.

ШУЛАЙ ИТЕП...

Бөгөн йәштәрҙе музыка, кинематография, мода өлкәһендәге зауыҡты билдәләүсе мөһим фактор булараҡ ҡына түгел, ә уларҙың киләсәктә йәмғиәттең сәйәси, иҡтисади һәм социаль структураһын билдәләүселәр буласағын да танырға ваҡыт еткәндер, моғайын. Донъя цивилизацияһы үҫешенең төп билдәһе булып тормоштоң бөтә өлкәләрендә лә кеше роленең артыуы тора. Йәмғиәттең төп байлығы булып тупланған капитал, компьютер, лазер, техника һәм иҡтисад түгел, ә шуларҙы уйлап табыусы кеше һанала. Шуға ла йәштәрен уҡытыуға, тәрбиәләүгә, уларҙың йәшәйешен, сәләмәтлеген яҡшыртыуға етди ҡараған йәмғиәт үҙенең үҫешен инвестициялай. Ошо йәһәттән оло ҡоролтай эргәһендә Йәштәр ҡоролтайы үткәрелеүе, унда ҡатнашырҙай йәштәребеҙҙең булыуы, уларҙың милли идеология менән янып йәшәүе халҡыбыҙҙың киләсәге ышаныслы ҡулдарҙа буласағына ишара, сөнки киләсәктә йәштәр аңлы һәм әүҙем рәүештә үҙҙәре төҙөргә бурыслы.

Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Ләйсән НАФИҠОВА
әңгәмә ҡорҙо.

✓ Алай ҙа Илһам алдында бирмәне был һорауҙарын. Шуға һөйөндө Резеда. Яйлап үҙе һөйләр әле. Һөйләһә... Барыһын да үҙе аңлатырға тейеш икәнен белә ул, әммә... ни йөрәк менән? Аңларҙармы уны? Ғәфү итерҙәрме?

- Әйҙә, әйҙә, кеш! Кеш! Тиҙерәк булығыҙ! Һеҙҙең менән һуҙылып йөрөргә бер ҙә генә лә ваҡытым юҡ бөгөн!

Ынйыбикә апай бит. Килен кеше бына ниндәй сос булырға тейеш! Ә ул етегә саҡлы йоҡо һимертә. Солан ишеген асыуға, Резеданы күреп тә ҡалды.

- Ә һин ниңә әҙерәк йоҡламай, таң менән тороп йөрөйһөң?

- Йоҡом туйҙы инде. Ауыл өйөндәге йоҡо шул тиклем татлы! Рәхмәт инде һеҙгә!

- Ярай-ярай, бар, йоҡла әҙерәк, кисә арығанһығыҙҙыр!

- Эй ҙә! Оялмайынса йоҡлап ятмайым инде. Ҡана, һыйырҙарығыҙҙы һауышайым.

- Туй күлдәгендәме? -Ынйыбика көлөп ебәрҙе. - Ҡуй, килен, ҡуй, берәйһе ишетеп ҡалмаһын! Ҡәйнәңә лә шунда уҡ алып барып еткерерҙәр, - тип Ынйыбикә йүкә телефондың нисек эшләүен аңғартты Резедаға. - Мин үҙем дә һәләк шәп ул. Бар, булмаһа, сәй ҡуя тор. Шкафтан үҙеңә ябаған берәй халатты алып кей, - тип тә өҫтәне.

Резедаға уны тыңлауҙан башҡа сара ҡалманы. Сәй ҡуйғас, яңынан үҙҙәре йоҡлаған бүлмәгә күтәрелде. Өҫтөн алыштырҙы, буянғыстарын алып, залға инде. Бәй, бында бит футбол уйнарға мөмкин! Йорт төҙөһәләр, мотлаҡ уларҙыҡы кеүек итеп һалырға кәрәк. Резеда сәсен үрҙе, битенә крем һөртөп, күҙ-ҡаштарын һыҙҙы. Бынан ары ул гел иртәрәк тороп, үҙен ҡараясаҡ. Бер кем дә уны шамтыр килеш күрмәҫ. Һәр ваҡыт йылмайып йөрөйәсәк ул, барыһына ла алсаҡ буласаҡ. Ҡан илағанда ла, ҡайғы-һағышын белдермәйәсәк. Әлегә Илһамды уятманы, сәй әҙерләр ҙә, шунан саҡырыр. Ынйыбикә апаһы ла эшен бөтөрөп инде.

- Был килен ҡайһылай шәп булып сыҡты! - тип йылмайҙы ул әҙер өҫтәлгә күҙ һалып. - Үҙемә генә алып ҡалыр ҙа ҡуйыр инем, малайҙарым юҡ шул!.. Ярай, өйҙө белдең, йышыраҡ килеп йөрөрһөң. Илһам йоҡлаймы әле?

- Эйе, йоҡлай.

-Һуңғы арала арыны ул, йонсоп китте. Ҡамыт кеймәҫ борон ҡулланып ҡалайыҡ, тинеләр шикелле, уныһы ул яҡҡа, бныһы был яҡҡа тартҡысланылар ғына. Шәп ул минең ҡустым. Уңдың! - Ынйыбикә шулай һөйләнә-һөйләнә йыуыныу бүлмәһенә инеп юғалды. Ауыл ере тип тормағандар, бәҙрәфен дә, ваннаһын да эскә ҡуйғандар. Алтын инде ҡулдары, алтын! Ире кем икән? Кисә лә күренмәне. Һорашаң, уңайһыҙ кеүек. Ярай, Илһамдан һорашып белешер әле. Икенсе ҡатҡа күтәрелгәндә шуларҙы уйланы Резеда. Ире ул ишекте асыуға күҙҙәрен асты. Карауатына ултырған килеш кәләшенә ҡарап ҡатты.

Аш бүлмәһенә танауын өҫкә сөйөп, тәмле еҫтәрҙе еҫкәй-еҫкәй барып инде Илһам.

- Эй, бигерәк уңғанһың да инде, апай! Йыбанмай, әллә нәмәләр әҙерләп өлгөргәнһең!

- Һин миңә түгел, мин мал менән булған арала табын әҙерләгән кәләшкәйеңә рәхмәт әйт.

Ҡунаҡтарҙы - ҡоҙа-ҡоҙагыйҙарын шаулап оҙаттылар. Шул арала бер-береһен оҡшатып, туғанлашып бөткәйне улар. Туҡтауһыҙ бер-береһенә рәхмәттәр уҡынылар, йәштәргә бәхет, оҙон ғүмер, мөхәббәт теләнеләр. Резедаға ҡыуанысла ла, моңһоу ҙа. Бына бит, әҙәмсә тормош нисек була. Бөтә нәмә үҙ сираты, үҙ яйы менән аға. Ул ғына иртәгә, иртәгә генә түгел, бер сәғәттән нимә булырын белмәй йәшәне. Һәр минутын ҡурҡыу, көтөү менән үткәрҙе. Шулай уҡ барыһы ла артта ҡалдымы икән ни? Ышанып та булмай! Үҙҙәре генә ҡалғас, шаулап торған йорт тынып ҡалды. Бөтәһе лә арығайны, һауыт-һаба тиҙ генә күмәкләп йыйыштырып алғас, һәр береһе тиҙерәк үҙ өйөнә ашыҡты. Резеда биҙрә менән һыу индерҙе.

- Килен, әллә иҙән йыуырға уйланыңмы? Ял ит әҙерәк, арыманыңмы ни? Эш ни, ҡасмаҫ әле!

- Юҡ, ҡәйнәм, бөгөн эшләй торған эште иртәгәгә ҡалдырырға яратмайым. Ҡыйын булһа ла, эшемде аҙағынаса еткереп ҡуям, - тип йылмайҙы ҡәйнәһенә яуап итеп.

- Ә мин уға ярҙам итәм! - Илһам йәһәт кенә улар янына килеп баҫты.

- Нисек? Сепрәк тотоп, туңҡандап иҙән йыуып йөрөрһөңмө ни? - Әсә улына һағайып ҡараны. Кәләш алдым тип, тәүге көндән үк елкәһенә ултыртып ҡуймағайы! Эргәһендә орсоҡ кеүек әйләнә, юҡһа.

- Илһам, әйберҙәрҙе шылдырырға кәрәк булһа, һине саҡырырмын. Әлегә урам тирәһендә булышһаң да еткән. Ә миңә бикәстәр ярҙам итә, шулаймы, ҡыҙҙар?

Һылыу еңгәләренән күҙҙәрен алмай эргәһендә йөрөгән бикәстәре шатланып риза булды. Бөгөн бигерәк алсаҡ еңгәләре. Исемдәрен дә белеп өлгөргән, һәр береһенә үҙенең тиңе кеүек күреп өндәшә. Бикәстәре менән косметика, мода тураһында һөйләшеп тә өлгөрҙөләр инде. Уртаҡ серҙәре барлыҡҡа килде. Шуға күрә һис тә янынан киткеләре килмәй.

Киленең алсаҡлығын Миңзифа ла һиҙҙе. Кисәге өндәшмәҫ, моңһоу ғына йылмайып тик ултырған ҡыҙ тип һис әйтмәҫһең. Төн эсендә былай алай үҙгәргәнме! Илһамға ла яратып, наҙлап ҡарай. Ҡәйнә булдым тигәс тә, ҡул ҡаушырып ултыра алмай инде, киленең "ял ит, үҙебеҙ эшләйбеҙ", тиеүенә ҡарамай, хәленән килгәнсе ярҙам итергә тырышты. Киленең һәр аҙымын күҙәтте. Хужабикә баны тиҙ генә күмәкләп йыйыштырып алғас, һәр береһе тиҙерәк үҙ өйөнә ашыҡты. Резеда биҙрә менән һыу индерҙе.

- Килен, әллә иҙән йыуырға уйланыңмы? Ял ит әҙерәк, арыманыңмы ни? Эш ни, ҡасмаҫ әле!

- Юҡ, ҡәйнәм, бөгөн эшләй торған эште иртәгәгә ҡалдырырға яратмайым. Ҡыйын булһа ла, эшемде аҙағынаса еткереп ҡуям, - тип йылмайҙы ҡәйнәһенә яуап итеп.

- Ә мин уға ярҙам итәм! - Илһам йәһәт кенә улар янына килеп баҫты.

- Нисек? Сепрәк тотоп, туңҡандап иҙән йыуып йөрөрһөңмө ни? - Әсә улына һағайып ҡараны. Кәләш алдым тип, тәүге көндән үк елкәһенә ултыртып ҡуймағайы! Эргәһендә орсоҡ кеүек әйләнә, юҡһа.

- Илһам, әйберҙәрҙе шылдырырға кәрәк булһа, һине саҡырырмын. Әлегә урам тирәһендә булышһаң да еткән. Ә миңә бикәстәр ярҙам итә, шулаймы, ҡыҙҙар?

Һылыу еңгәләренән күҙҙәрен алмай эргәһендә йөрөгән бикәстәре шатланып риза булды. Бөгөн бигерәк алсаҡ еңгәләре. Исемдәрен дә белеп өлгөргән, һәр береһенә үҙенең тиңе кеүек күреп өндәшә. Бикәстәре менән косметика, мода тураһында һөйләшеп тә өлгөрҙөләр инде. Уртаҡ серҙәре барлыҡҡа килде. Шуға күрә һис тә янынан киткеләре килмәй.

Киленең алсаҡлығын Миңзифа ла һиҙҙе. Кисәге өндәшмәҫ, моңһоу ғына йылмайып тик ултырған ҡыҙ тип һис әйтмәҫһең. Төн эсендә былай алай үҙгәргәнме! Илһамға ла яратып, наҙлап ҡарай. Ҡәйнә булдым тигәс тә, ҡул ҡаушырып ултыра алмай инде, киленең "ял ит, үҙебеҙ эшләйбеҙ", тиеүенә ҡарамай, хәленән килгәнсе ярҙам итергә тырышты. Киленең һәр аҙымын күҙәтте. Хужабикә сәк эшләргә теләүен аңғарта ла, мөлдөрәп ҡәйнәһенә ҡарай. Ә ул кәңәш иткәндәр дөрөҫ бит! Ҡала кешеһе айырылып тора шул. Бик ҡәнәғәт ҡалды килене менән Миңзифа.

Иртәгәһен Резеда таң менән тороп үҙен рәткә килтерҙе, иренең таҙа әйберҙәрен әҙерләне, ҡәйнәһенең ай-вайына ҡарамай, һыйырҙарын да һауышты, ҡош-ҡортон да ҡараны.

Илһамдың үҙенең эше: буш ваҡыттарында быйма баҫа ул. Аҙаҡ районға алып барып тапшыра. Өйөнән дә һата. Ҡышын һәйбәт кенә аҡса эшләй шулай. Ә йәйле-көҙлө ауылда былай ҙа эш етерлек. Илһамдың эштән ҡурҡмауы, уңғанлығы, берҙе биш итергә әҙер тороуы һөйөндөрҙө Резеданы. Туйҙың икенсе көнөнә үк хужаларса эшкә тотондо.

Төшкөлөккә йәштәрҙе Динә менән Шатморат сәйгә саҡырғайны, икеһе лә эштәрен йәһәт кенә тамамлап, шунда киттеләр. Юл ыңғайы Резеда магазинға инеп, күстәнәскә алма-әфлисунынан, ҡиммәтле генә печеньекәнфитенән үлсәтеп алды. Буш ҡул менән барып инеү килешмәҫ. Динәләр күрше ауылда тора. Ике ауыл араһы йыраҡ түгел, машина менән "һә" тигәнсе барып та еттеләр. Әхирәте килен булып төшкән ауыл да урман-тауҙарға һыйынып ҡына ултыра. Быйыл ғына өй һалып ингәндәр. Шуға күрә әлегә соландары ла, кәртә-ҡураһы ла юҡ. Мал-тыуарын ҡәйнәләрендә ҡалдырып торғандар. Динә әхирәтен ихлас әҙерләнеп көткәйне.

Йорт эсендә лә әлегә иҫ китерлек йыһаз юҡ. Сәй эсергә һырлап-семәрләп ҡулдан эшләнгән өҫтәл-ултырғыстары бар. Бер яҡ стенаның буйынан буйына ҡуйылған оҙон һауытһаба шкафы ла шул уҡ оҫтаның ҡул эше. Залда ике кресло менән йомшаҡ диван урын алған. Бүлмә уртаһында өҫтәл тора, дүрт яғынан оҙон артлы дүрт ултырғыс ҡуйылған. Тәҙрәләре ҙур, күп. Шуға күрә өй эсе яҡтылыҡҡа сорналған һәм йылы бер нур бөркә. Динә, әхирәтен күреүгә ҡыуанып, атлап түгел, йүгереп кенә йөрөй, теле телгә йоҡмай. Бала саҡтарынан, йәшлек мәлдәренән әле бер ваҡиғаны иҫенә ала, әле икенсеһен. Ҡыҙыҡ. Бер нәмәне лә онотмаған. Ә Резеда күп ваҡиғаларҙы ул һөйләгәс кенә иҫенә төшөрҙө, унда ла тулыһынса түгел. Ҡайһы берҙәрен бөтөнләй онотҡан булып сыҡты.

Динә ҡаҙан тултырып аш һалған. Өфөлә ҡоро-һары менән генә туҡланып йөрөгән Резедаға ҡаҙ ите таныҡ ине, әллә нисә киҫәк ашап ташланы. Тыуған йорто, әсәһе иҫенә төшөп, түҙеп торғоһоҙ нағыш баҫты. Түгелеп, күңеле булғансы илағыһы килде. Бүтән кешелә, бәлки, бындай тойғоно кисермәҫ тә ине, Динә иһә күңел төбөндәге бар иҫтәлектәрҙе өҫкә сығарып һалды. Ҡайһылай рәхәт була торғайны: иртән өй эсенә таралған тәмле ҡоймаҡ еҫенә уянып китәһең... Әсәһе йыш ҡоймаҡ ҡойҙо микән, әллә ниңә уның хәтерендә нәҡ ошо еҫ һаҡланып ҡалған. Хуш еҫле үләндәр һалып ҡайнатылған сәйҙе тәмләп эсәһең дә, мәктәпкә йүгерәһең. Тағы әсәһенең ҡул йылыһын һағына ул. Нимәгәлер бик әрнеп, рәнйеп илап ҡайтып инәһең, әсәйең йылы ҡосағына ҡыҫып, йәшле күҙҙәренән үбеп, сәсенән һаҡ ҡына ыйпаһа, иркә һүҙҙәр әйтһә, барыһы ла һыпырып алғандай юҡҡа сыға. Һин илауҙан туҡтайһың, бер талай иң ҡәҙерле кешеңдең йөрәк тибешен тыңлап ултыраһың һәм уның ошо тыныслығы һиңә лә күсә. Әле генә ҡайғырып, ни эшләргә белмәгән ҡыҙ яңынан көлә-шаяра, уйнай башлай. Әсәһенең кәңәштәре лә ҡолаҡ төбөндә. Ҡайһы берҙә ҡайыш менән ныҙырлыҡ ҡылыҡтар ҡылып ҡуяһың, әммә шул мәлдә лә әсә кешенең тыныслығына, аҡылына иҫең китерлек. Резеда шаталағыраҡ ине шул. Иркә булды.

- Резеда, белһәң икән минең нисек шатланыуымды! - тип, ирҙәр тартырға сыҡҡан арала ҡыуанысын тағы бер белдерҙе Динә. - Үҙем дә инде! Ер аяғы ер башына сығып китмәһәм, ауылыбыҙҙа егеттәр бөткән тиерһең! Бында яңы дуҫтарым да барлыҡҡа килде, иремдең туғандары ла минең өсөн ah итеп тора, әммә... барыбер күңелдең бер сите китек ине, белдем хәҙер сәбәбен - һин етмәгәнһең икән!

- Мин дә шатмын, Динә. Ысын! - Резеда был һүҙҙәрҙе ысын күңеленән әйтергә тырышты. Ул әле һаман бөгөнгө хәленә ышанып етә алмай ине әле.

- Ҡара әле, һинең менән мәктәпте тамамлағандан һуң яҡшылап күрешкәнебеҙ ҙә булманы. Ҡайҙа юғалдың ул? Мин был турала йыш уйлайым.

- Әлләсе, уҡыным бит. - Резеда бит осоноң алһыуланғанын тойҙо. Быны һиҙҙермәҫкә тырышып, тәҙрә төбөндә ятҡан гәзитте барып алды.

- Мин дә уҡыным да баһа! Әммә ауылға ҡайтырға ла, клубҡа сығырға ла өлгөрә торғайным. Ә һин һыуға батҡандай юҡ булдың.

- Әллә ни ҡайтып йөрөп булманы шул. Алыҫ ине бит. - Резеданың күҙ ҡабағы тартышырға тотондо. Ҡулындағы гәзитте йәһәт-йәһәт асҡыланы. Әммә күҙҙәре бер хәрефте лә таныманы.

- Әсәйеңдән һорамам, ул эшкә төшкән, ти торғайны, ҡайҙа эшләнең һуң? - Әхирәтендәге үҙгәреште һиҙмәгән Динә төпсөнөүен белде.

- Улар елкәһендә ятҡансы тип, эшләгәйнем шул... - Резеда уратып-суратты. Үҙенең бите генә түгел, тотош тәне ялҡынланып янды.

- Уҡып бөткәс тә алған белемең буйынса эшләмәнең шикелле?

- Уҡытыусы булғым килмәне...

- Уныһы шулай инде. Һатыусылар барыбер аҡса эшләй белә. Беҙ генә ул...

Резеда кем һораһа ла "Бай ғына бер фирмала һатыусы булып эшләйем", ти ҙә ҡуя ине, Динәгә лә шул хәбәр ишетелгән икән.

- Ә теге фатир? Һинекеме? Теге ваҡытта яҡшылап һорашырға ваҡыт та булмаған ул.

- Фатир минеке... - Резеда көлөмһөрәп ҡуйҙы. - Күҙ йәштәре аша бирелгән фатир ул...

- Нисек инде - күҙ йәштәре аша?

- Ауырлыҡ менән, тием, - Резеда үҙен төҙәтә һалды. - Яҙмышым ҡыҙыҡ түгел, һин һөйлә.

- Нимә һөйләйем һуң? - Динә көлөп ебәрҙе. - Һөйләп бөттөм бит инде!

-Уҡытыусы эше ҡыйынмы? Ҡайһы берҙә минең дә балалар менән эшләгем килеп китә.

- Ауылығыҙҙа мәктәп бар бит, берәй урын бушаһа, ауыҙыңды асып йөрөмә! Бөгөн ни шул уҡытыусылар ҙа, силсәүит менән табиптар аҡса ала инде.

Алай ҙа Илһам алдында бирмәне был һорауҙарын. Шуға һөйөндө Резеда. Яйлап үҙе һөйләр әле. Һөйләһә... Барыһын да үҙе аңлатырға тейеш икәнен белә ул, әммә... ни йөрәк менән? Аңларҙармы уны? Ғәфү итерҙәрме? Мәңгелек сер итеп ҡалдырғанда тағы ла яҡшыраҡ. Бәлки, тап шулай итер ҙә. Өфөлә уның нисек йәшәгәнен бер кем белмәй бит. Ауылдаштары, элекке яҡташтары менән аралашманы ла тиерлек. Иргәле мәрхүм булды, ҡалғандары урыҫтар ине. Нимәйҙер уртаҡ таныштар килеп сығыуы икеле. Алыҫ районға кейәүгә сығыуы ла ҡулай: был яҡта таныштары бөтөнләй юҡ.

(Дауамы. Башы 20-21-се һандарҙа).

✓ *Финал сәхнәһе, актерҙарҙың баш эйгән ваҡытта ла уйнауын дауам итеү режиссерҙың әйтер фекерен шул тиклем көсәйтә - ошо минутта спектакль буйы илауҙан тыйылған тамашасы ла күҙ йәштәрен йәшерә алмайҙыр…*

ИЖАДХАНА

Әгәр ҙә берәй театр режиссеры профессиональ сәхнәлә Шекспирҙы ҡуйырға теләй икән, тимәк, уның театр эшмәкәрҙәренә һәм тамашасыға ниндәйҙер тос ҡына әйтер һүҙе бар. Сөнки Шекспирҙы ҡуйғанда төп герой Гамлет та, Ромео һәм Джульетта ла, Король Лир менән леди Макбет та түгел - режиссер һәм уның режиссер алымдары мөһим булып ҡала.

НӘФРӘТ, АЛЙОТЛОҠ, ҮЛЕМ. МӨХӘББӘТКӘ УРЫН БАРМЫ?

Ошо һорауға Вильям Шекспир һәм режиссер Илнур Муллабаев яуап бирҙе

Бөйөк драматургтың пьесалары хәҙерге заманда тарихты бәйән итеүгә лә, тарих һулышын биреүгә лә ҡоролмаған. Театр тамашасылары һәм тәнҡитселәр ошо тарихты, ятланып бөткән сюжеттарҙы режиссер нисек һөйләр, нисек күрер, актерҙарҙан нисегерәк уйнатыр, ниндәй яңылыҡтар индергән икән, тип ҡарарға килә. Донъяға киң билдәле башҡа драматургтар бындай фантазия иреклеген, заман элементтарын бик үҙһенмәй. Берәй режиссер Чехов йәки Островский, Лопе де Вега йәки Теннсеси Уильямсты беҙҙең заманға яраҡлаштырып, башҡа уйҙырмаларға юл ҡуя башлаһа, уны ҡыйыу экспериментатор йәки претензиялы режиссер, тип атап, тәнҡитселәр ябырыла башлаясаҡ. Ә Шекспир, бөйөк Шекспир, үҙе лә уйҙырма донъяла рәхәтләнеп йөҙгән, бар донъя өсөн асыҡ Шекспир һәр режиссерға үҙен асырға, театр сәнғәтенең өлгөргәнлек аттестаты алырға ярҙам итә.

Шулай итеп, М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрында ҡуйылған "Ромео һәм Джульетта"ның төп геройы - режиссер Илнур Муллабаев. Мин уны йәш режиссер тип әйтмәйем, сөнки Башҡортостандың сәнғәт донъяһында "йәш" тигән һүҙ башта маҡтау кеүек яңғыраһа ла, аҙаҡ мөһөр булып тағылыуы бар. Байтаҡ ижадсыларҙы бик оҙаҡ "йәш" көйө тотоп, тулы ҡанлы ижад тормошона сығармайынса, ҡартайтып ебәрәләр. Илнур - йәш режиссер түгел. Ул - өлгөргән, аяғында нык баҫып, үҙенең һөнәрен яҡшы белгән, эҙләнеүсән, талапсан, үҙ ижадының, фекерҙәренең кемгә һәм нимәгә йүнәлтелгәнен аңлаған театр режиссеры.

Пьесала ваҡиғаларҙы бәйән иткән хор тәү сығыуҙан уҡ кейгән кейемдәре, битлектәре ярҙамында Веронала хөкөм һөргән Үлем һәм Нәфрәт хаҡында һөйләй. Спектакль барышында был оргия дауам итә - композитор Урал Иҙелбаев ошо теманы бик аныҡ асып бирә. Бына бер саҡ хор кешеләре һөйәктәр менән бейей башлай. Күренеш фарсҡа әйләнә, сөнки, ысынлап та, нәфрәттең сиге - алйотлоҡ. Режиссер был фекерен тамашасыға ябай итеп һөйләй. Ҡай саҡ ҡурҡыныс нәмә тураһында ғәҙәти һәм ябай итеп һөйләһәң, уның тәьҫире мең артыҡ була. Абсурд, тормош абсурды ябайлыҡҡа ҡоролған бит... Тик бар тамаша ябайлыҡҡа ғына ҡоролмаған, әлбиттә. Илнурҙың тамашасыны аптыратырға, ниндәйҙер эпатажлыҡ күрһәтергә яратыуын беҙ күптән беләбеҙ. Актер сағында уҡ уға "Замана Байығы" тигән бейеү нисек килешкәйне бит! "Сеңкелдәк себен" спектаклендә лә Илнур сағыу декорация, костюмдар менән уңышлы эш итте. Был юлы ла костюмдар йәһәтенән эпатажлыҡҡа, сағыулыҡҡа баҫым яһалды.

Режиссер был спектаклдә яңы исемдәр аса. Хореограф Ярослав Францевтың театрҙа был тәүге һәм бик уңышлы эше. Трагифарсты, ҡалала хөкөм һөргән алйотлоҡто заманса экспрессия хәрәкәттәре һәм урта быуат бейеүен хәтерләткән синхрон хәрәкәттәр менән оҫта берләштерә. Айырыуса, үлем хәбәрселәре - хор һәм Капулетти йортонда үткәрелгән бал ваҡытында шашыныу - хореографтың ҙур уңышы, тип әйтер инем. Заманса бейеү һалыуы, Ҡушма Штаттарҙа хореография буйынса белемен үҫтергән Ярослав Францевтың театр өлкәһендә был тәүге һәм ҙур уңышы.

Эйе, нәфрәттең сиге - алйотлоҡ. Тап ошо алйотлоҡ донъяла иң ҡурҡыныс, үлемесле һуғыштар ҡуптарған, алйот тәғлимәттәргә меңләгән, миллионлаған кешене ышандырып, ҡан ҡойош башлаған. Аҡылға ҡарағанда алйотлоҡҡа кеше бик тиҙ бирелеүсән шул. Ромео менән Джульеттанан, Рухани атайҙан /Нәғим Нурғәлин/ башҡа Үлем бейеүендә һәр кем бейей, һәр кем уның усағын дөрләтеүгә өлөш индерә. Хатта үтә лә эскерһеҙ Джульеттаның һөт әсәһе лә /актриса Рәмилә Сәлимгәрәева/ яратҡан ағаһы Тибальт үлеменән һуң Джульеттала Ромеоға ҡарата нәфрәт тыуҙырып маташа. Һәм тап шул минутта Джульетта үҙенең ҡайғыһы менән Капулетти йортонда япа-янғыҙы ҡалғанын аңлай...

Пьесала ҡанға мансылмаған өс йөрәк - Рухани атай, Ромео һәм Джульетта. Һөйөүҙең бөрөләнеп, иң саф сағын асып биргән ике йәш йөрәк һәм ошо һөйөүҙе күктәр, Хоҙай тарафынан никахлаған Рухани атай. Ошо изге өсәү Веронаны ҡотҡарыр ине лә бит, тик нәфрәт менән тамам ағыуланған Веронаны сафландырыу өсөн ҡорбан көрәк шул... Костюмдар буйынса рәссам был өсәүҙе аҡ кейемдәргә генә кейендергән, ә Урал Иҙелбаев улар хаҡында иң юғары, күңелде әллә ниндәй офоҡтарға осорорлоҡ көйө менән бәйән итә.

Илгизә Ғилманова уйнаған Джульетта (мин спектаклде ул уйнағанда ҡараным) - ул оло мөхәббәткә әҙер булмаған эскерһеҙ бер йән. Нәзәкәтле, наҙлы актриса тап ошо ролде башҡарырға тейеш кеүек. Режиссер Джульеттаны үҙ донъяһында ғына йәшәгән бер ихлас йән эйәһе итеп күрһәтә. Джульетта бер аҙ тотлоға, "р" хәрефе лә ҡай саҡ килеп сыҡмай уның. Һөт әсәһен көткәндә лә ул балаларса түҙемһеҙлек күрһәтә, таяҡ менән тимер баҫҡысҡа һуҡҡыслай. Спектаклгә Джульетта яланаяҡлап килеп инә - баҡтиһаң, ул балыҡ ҡармаҡларға барған. Донъяла иң ғәмһеҙ шөғөл бит ул - балыҡ ҡармаҡлау! Һиңә бер кем дә, бер нәмә лә кәрәкмәй!

Ҡармаҡ тотоп килеп ингән Джульеттаны ололар донъяһына көсләп, этәреп индереп ебәрәләр. Ә ололар донъяһы - ул нәфрәт, ул байлыҡҡа алданыу, ул ҡан ҡойош һәм... ҙур, шундай ҙур-ҙур мөхәббәт! Тик мөхәббәт ололар донъяһында бер нәмә лә түгел. Әҙәм ғүмерен дә шаярышып ҡына, бер-береһен үртәп өҙәләр бында! Нимә эшләргә? Был донъяла мөхәббәткә урын юҡ икән, теге донъяға китергә инде! Һәм бына беҙ финалда, иң бейектә нәфрәт һәм алйотлоҡтоң дүрт ҡорбаны - Ромео, Джульетта, Меркуцио һәм Тибальттың яланаяҡлап, ғәмһеҙ генә балыҡ ҡармаҡлағанын күрәбеҙ. Бөтә актерҙар баш эйергә сыҡҡанда ла был дүртәү күктәрҙән төшөргә ашыҡмай - уларға бында рәхәт, ә ер донъяһы - ул ҡурҡыныс, ул әшәке...

Ошо финал сәхнәһе, актерҙарҙың баш эйгән ваҡытта ла уйнауын дауам итеү режиссерҙың әйтер фекерен шул тиклем көсәйтә - ошо минутта спектакль буйы илауҙан тыйылған тамашасы ла күҙ йәштәрен йәшерә алмайҙыр...

Спекталдә уйнаусы һәр актер тураһында һоҡланып яҙырға була. Ромеоны уйнар өсөн яратылған сибәр Роберт Йылҡыбаев, ҡылансыҡ Меркуцио - Салауат Юлдашбаев, үҙенең шпагаһынан башҡаһын күрмәүсе Тибальт - Рәмзил Сәлмәнов, Джульеттаның һөт әсәһе Рәмилә Сәлимгәрәева, Парис - Роберт Камалов... Һәр кем үҙ ролен яратып, рәхәтләнеп башҡара.

Әйе, ятланып бөткән сюжет... Тик уны мәңгелек, иң көслө мөхәббәт тарихы тип атау дөрөҫ микән? Ни өсөн, улайһа, Ромео тәүге сәхнәлә үк "О, Розалина!" тип яр һала? Ун алты йәшлек егеттең яратҡыһы һәм яратылғыһы килә. Йән тартымынан өҫтөнөрәк тән тартымы, дәртле ҡан уйнай унда. Әгәр ҙә Шекспир Ромеоны романтик итеп күрһәткәһе килһә, ул уны икенсе ҡыҙға ғашиҡ булған, әммә бал ваҡытында Джульеттаны осратып, шундуҡ Розалинаһын онотоусы егет итеп һүрәтләр ине микән? Минең үҙемде был һорау күптән ҡыҙыҡһындыра ине. Илнур ҡуйған спектаклдә мин был һорауыма яуап алдым. Тәүге сәхнәлә Ромео һәм Бенволио /Радмир Абдуллин/ һөйләшеүендә үк мөхәббәттең физиологик яғы асып күрһәтелә. Хыялда ғына йәшәгән Розалинаның йомро түштәре лә, килешле формалары ла булыуын ишаралап күрһәтә Бенволио. Эйе, Ромео - дәртле егет, әммә ул романтик түгел. Шуға ла Джульетта уны балкондан саҡырғас уҡ, ул салбарын сисә башлай, яланғас ҡалырға ашыға. Режиссер тамашасыны көсләп көлдөртөргә тырышмай - ул ошо ябай алым менән Ромеоның психологияһын аса. Ысынлап та, тәү күрешкәндә ун алты йәшлек дәртле егет менән ун дүрт йәшлек ҡыҙҙың ниндәй мәңгелек мөхәббәт булһын инде? Тән тартымы ғына. Пьесалағы ваҡиғалар бары биш көн әйләнәһендә бара. Биш көн эсендә бер кем дә Оло Мөхәббәт кисерҙем, тип әйтә алмай.

Улайһа, трагедия нимәлә һуң, тип һорарһығыҙ? Трагедия нәфрәт һәм алйотлоҡ донъяһында мөхәббәт тураһында һүҙ ҙә йөрөтөргә ярамауы хаҡында. Мөхәббәткә урын юҡ - бөрөләнеп килгән мөхәббәтте үлем генә ҡотҡара ала. Һәм ихлас тойғоларына ҡурҡыныс янағанда Ромео ла, Джульетта ла бик тиҙ олоғайырға мәжбүр. Ҡурҡыныс янаған өсөн дә ғишыҡ тойғоһо ысын мөхәббәткә әүерелә башлай. Тик әүерелеп өлгөрмәй...

Режиссерҙың тағы бер уңышы - ул физиология менән иң юғары хистәр, комедия менән трагедия араһындағы нескә ҡылдарҙы бик оҫта сиртә. Бихисап сәхнәләрҙең береһен генә һөйләп үтәйем. Бына бейектә аҡ юрған аҫтынан яланаяҡтарын сосолтоп, Ромео һәм Джульетта пәйҙә була. Залда - көлөү. Ә бер-нисә секундтан көлөүҙе күҙ йәштәре алмаштыра: Ромео һәм Джульетта беренсе һәм һуңғы төндәрендә болотҡа уранып ултырған ике фәрештәне хәтерләтә башлай...

Үкенескә ҡаршы, спектаклдең китек яҡтары ла булды шул. Тәржемә талап иткән спектаклдәрҙе ҡарарға барһаң, былай ҙа энәләй ултырған кеүекһең. Был яҡтан ҡолаҡҡа ятмаған һүҙ сосолоп сыҡһынмы, рус һүҙҙәре менән бутай башлаһындармы... Был юлы, әлбиттә, күңел тыныс булды: тәржемәне театр донъяһын яҡшы белгән шағирәбеҙ Рәсимә Ураҡсина атҡарған. Тик "хлобысть", "сводня", "аптекарь" кеүек һүҙҙәр йөрәккә беҙ кеүек ҡаҙала. Был, әлбиттә, тәржемәсе ғәйебе түгел.

Режиссерҙарыбыҙ күбеһенсә русса уйлай, уларға башҡорт тәржемәһе күп осраҡта формаль рәүештә генә кәрәк. Тел таҙалығына артыҡ иғтибар бирелмәй. Ә бит тел матурлығы, тел яғымлығы, байлығы тап театрҙа сәскә атырға тейеш. Шуға ла режиссер һәм тәржемәсе тигән ижади, ныҡлы бәйләнеш, дуҫлыҡ барлыҡҡа килмәйенсә, тәржемәле пьеса айырым бер әҙәби әҫәр булыуға өлгәшмәйәсәк.

Мәҡәләмдең аҙағында, режиссерҙың тағы бер уңышын әйтмәй булдыра алмайым. Режиссер - ул ижадсы ғына түгел, ул ойоштороусы ла. Спектаклгә матур реклама, күҙ яуын тартып торған баннер /рәссам-дизайнер Арыҫлан Бикбаев/ - былар барыһы ла театрҙың эшмәкәрлеген яңы, заманса кимәлгә күтәрҙе.

Егерме йәшен тултырған Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры "Ромео һәм Джульетта" спектакле менән үҙенең ижад кимәлен билдәләне, үҙен ҙурланы, тиһәм дә, яңылышмаҫмын. Бөйөк Шекспирҙың әҫәре, ижади төркөмдөң ең һыҙғанып эшләүе, һәр кеменең - композиторҙың, хореографтың, рәссамдарҙың уңыштары, актерҙарҙың иҫ китмәле уйнауы, тамашасының спектаклдән һуң дәррәү алҡыштары - ошо инде ысын Театр. Ошо инде ысын Сәнғәт.

Зөһрә БУРАҠАЕВА.

✓ *шкә кәйефһеҙ килгән хеҙмәткәр 20 минут эсендә ҡалғандарҙың да кәйефен төшөрә. Бағтиһәң, бындай кешенән килгән биотулҡындар башҡаларға тәьҫир итергә һәләтле икән.*

ИНТЕРНЕТТАН

ӘСЕ АҘЫҠ ЯРАТЫУСЫ...

ҡатыраҡ йоҡлай

■ Британияның спорт журналы хәбәр итеүенсә, ултырып эшләү гипертонияға һәм диабетҡа килтереүе ихтимал. Бөгөн күп кешеләр 9-ар сәғәт буйына офиста ултыра, машинала йөрөй, һөҙөмтәлә, калориялар кәрәгенсә ҡулланылмай, аяҡ һәм арҡа мускулдары хәрәкәтләнмәй, метаболизм яйлана, умыртҡа бағанаһы нығылмалығын юғалта. Былар барыһы ла арҡа ауыртыуына, ҡан әйләнешенең насарайыуына килтерә, үпкәләр тулы ҡеүәтендә эшләмәү сәбәпле, организмға кислород етмәй башлай. Әгәр ҙә эштә көнө буйы ултырырға тура килһә, эшкә йәйәү йөрөргә, спортзалда шөғөлләнергә кәңәш итә табиптар.

■ Быға тиклем ҡына тәбиғи продукт иҫәпләнә ине. Әммә уны косметик буяу урынына ҡулланған кешеләрҙә миелобластлы лейкоз сире йышыраҡ күҙәтелә, тип иҫкәртә Leukaemia and Lymphoma журналы. Ҡына ярҙамында татуировкалар төшөрөү Ғәрәп Әмираттарында киң таралған. Статистика буйынса, бындағы ҡатын-ҡыҙҙар башҡа илдәр менән сағыштырғанда, миелобластлы лейкоз менән 62 тапҡыр йышыраҡ ауырый икән. Белгестәр әйтеүенсә, быныҡ төп сәбәбе булып ҡынаны иҙеү өсөн ҡулланылған бензол һанала. Курорттарҙа ҡулланылған ҡара ҡына составындағы парафенилендиамин тигән органик матдәнең дә файҙаһына ҡарағанда зыяны күберәк.

■ Гарвард университеты ғалимдары газлы эсемлектәрҙең ҡартайыу процесын тиҙләтеүен асыҡлаған. Бындай эсемлектәрҙә, ярымфабрикаттарҙа булған фосфаттар тирене киптереп, мускулдар атрофияһына, йөрәк һәм бөйөр сирҙәренә килтерә. Аҙнаһына ике стакан газлы һыу эсеү ҙә тиренең ҡартайыу процесын тиҙләтә.

■ Австралия психологы Герхард Шорт белдереүенсә, эшкә кәйефһеҙ килгән хеҙмәткәр 20 минут эсендә ҡалғандарҙың да кәйефен төшөрә. Бағтиһәң, бындай кешенән килгән биотулҡындар башҡаларға тәьҫир итергә һәләтле икән. Белгестәр әйтеүенсә, кемдең кәйефе йыш үҙгәреп тора, улар йөрәк-ҡан тамырҙары һәм ашҡаҙан сирҙәре менән дә йышыраҡ яфалана.

■ Күп сирҙәрҙе булдырмау өсөн көн һайын сырҙың ҡаты сорттарын ашау ҙа етә, тип белдерә фин ғалимдары. Финляндияның Турку университеты ғалимдары үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, сырҙағы файҙалы бактериялар - пробиотиктар иммун системаһын нығытыуға булышлыҡ итә. Эксперттар фекеренсә, сыр ашау бигерәк тә оло кешеләргә кәрәк.

■ Тасмания утрауы университеты раҫлауынса, чили боросо аппетит күтәреү һәм иммунитет нығытыусы яҡшы сара булыуҙан тыш, йоҡоһоҙлоҡтан да дауалай. Быныҡ өсөн көнөнә 15 грамм ғына чили боросо өҫтәлгән аҙыҡ ашау ҙа етә. Табиптар әйтеүенсә, ул йоҡоно яҡшыртып ҡына ҡалмай, йөрәк-ҡан тамырҙары системаһын да нығыта. Әммә чили боросон ашҡаҙан сирҙәре менән яфаланыусыларға ҡулланырға ярамай.

■ Коннектитут (АҠШ) университеты ғалимдары һомғол буйлы булыу өсөн иртән йоморткa ашарға тәҡдим итә. Аҡһымға бай иртәнге аш организмға етерлек көс биреп кенә ҡалмай, ә көн дауамында ашалған аҙыҡ күләмен дә ҡыҫҡарта. Бер йоморткала 70 калория иҫәпләнә.

ЙҮНСЕЛ ЙҮНЛӘР...

МАҠСАТ ҠУЙ ҺӘМ АТҠАР!

(Йәш эшҡыуар яҙмалары)

Әйткән ваҡыттарына барҙым. Күпмелер ваҡыттан һуң мин ҡулыма үҙемдең шәхси эшҡыуар икәнлегемде иҫбатлаған ҡағыҙҙар тотоп, шат йылмайып килеп тә сыҡтым. Ләкин шатлығым оҙаҡҡа барманы. Ваҡыт үтә, ә минең аппарат өсөн түләргә тейешле аҡсам юҡ. Өфөгә ҡайтышлай кемдән аҡса алып торорға мөмкин икәнлеген күҙаллап, ун кешенән торған исемлегемде барланым, өҫтәмәләр индерҙем. Дуҫтарҙан башланып, туғандар менән бөтә ине ул исемлек. Дөрөҫөн әйткәндә, аҡса эшендә туғандар менән эш итергә яратмайым мин, шуға күрә лә дуҫтарҙы алға ҡуйҙым. "Дуҫыңды юғалтҡың килһә, аҡса алып тор йә аҡса биреп тор", тиҙәр ҙә ул, ләкин минең был хаҡта уйлап торорға ваҡыт юҡ. Исемлегемдең бишенсе кешеһенә етеүгә, мин ҡайҙан тотондом был эшкә, тигән уйҙарға килә башлағайным инде. Бындай һорау менән шылтыратыуыма кемдер аптыраны, кемдер төпсөнөп һорашырға кереште, ә кемдер, күрәһең, ундай сумма тураһында ишеткәс, иҫтән яҙҙы, сөнки телефон трубкаһы бик оҙаҡ ҡына шымып торҙо. Әммә ләкин артҡа сигенеү юҡ, башлаған эште аҙағынаса алып барып еткереү мөһим. Бөтә ауырлыҡтан сығыу юлы бар икәнлеген күптән үҙләштергәнмен. Шулай итеп, исемлегемдең алтынсы урынын биләгән дуҫыма шылтыратам. Гудоктар китте, минең йөрәк лепләп тибә. Телефондың теге яғындағы дуҫыма үҙ үтенесемде әйттем. Ә быға тиклем шылтыратыуҙар хәләүхәл һорашыуҙар менән башланып, ун-ун биш минуттан һуң ғына мине борсоған һорауға барып төртөлә ине. Ә был күпме ваҡытты ала һәм минең былай ҙа иҫәпле генә аҡсамды һура ине. Һәм тағы ла шуныһы: оҙағыраҡ һөйләшкән һайын, үтенесеңде әйтеү ҙә ауырлаша төшә. Үтенесемде әйттем... Тынлыҡ... "Ҡасан ҡайтара аласың?" - тигән һорауҙы ишеткәс, йөрәккә аҙыраҡ йылы йүгерҙе. "Белмәйем", - тим, сөнки ысынлап та ҡасан бурысты ҡайтара алырымды күҙ алдына ла килтерә алмай инем, "Өс көндән булыр", - тине дуҫым. Ошо өс кенә һүҙ мине шул минутта донъялағы иң бәхетле кеше итте. Йөҙ һум аҡсаң булғансы, йөҙ дуҫың булһын...

Шулай итеп, оҙаҡламай минең ҡулда кәрәкле аппарат та бар ине. Артабан тағы ла ҡыҙығыраҡ та, аптырарлыҡ та, көйҙөрөрлөк тә ваҡиғалар башланды. Һәр ваҡиғаға үтә тәрәнгә төшмәй, артыҡ хистәргә бирелмәй ҡарарға күнеккәнмен. Шуға күрә лә артабанғы "мажараларымды" мин күберәк көлкө күҙлегенән ҡарап баһаланым. Күп ваҡытта беҙ төймәне лә дөйәләй күрәбеҙ. Бәләкәй генә проблемаларыбыҙҙы ла тауҙай өйөп аптырайбыҙ, уфтанабыҙ, төшөнкөлөккә бирелергә әҙер генә торабыҙ. Ә тирәйүнебеҙҙә беҙҙекенән дә ауырыраҡ, ҡатмарлыраҡ тормош ҡуласаһына эләккәндәр барҙыр, тигән уй башыбыҙға ла инеп сыҡмай. Хәл итеп булмаҫтай нәмә булмай ул тормошта. Ошоно иҫтән сығармай, үҙенде аҙ ғына тынысыраҡ тотоп, төрлө яҡлап уйлаһаң, бар нәмәнән дә сығыу юлы бар. Ошондай, беҙҙең ҡарамаҡҡа ауыр тойолған минуттарыбыҙҙа яҡындарыбыҙҙы ла рәнйетергә күп һорамайбыҙ. Йәнәһе, мине аңламайҙар. Ә уларҙың да борсоулы уйҙарға бирелеп, беҙгә нисек тә булһа ла ярҙам итеү юлдарын эҙләүе тураһында уйламайбыҙ.

Ҡыҫҡаһы, артабанғы хәл-ваҡиғаларға ҡыҫҡаса күҙәтеү. Ошондай эшкә тотонорға ҡарар итеүемдең тәүге минуттарында уҡ мин Өфөнән алыҫта ятҡан, үҙем әле бер тапҡыр ҙа булмаған районда эшемде башлармын, тип хәл иттем. Һәм бына ул көн килеп етте. Күпмелер ваҡытҡа минең өсөн тыуған, яҡын һәм дә ҡәҙерле булып өлгөргән баш ҡалабыҙҙы ҡалдырып, китергә тура килде. Ваҡыт һиҙелмәй ҙә үтә, һыу кеүек аға. Миңә лә шул ағымдан ҡалышмаҫҡа кәрәк. Аппаратым еңел машинаға һыймау сәбәпле, ҙур йөк машинаһы ялларға тура килде. Бында ла дуҫтарымдың күп булыуы ҡотҡарҙы. Алла ярҙам бирһен үҙҙәренә лә, тимен. Йөк ташыу компанияларынан айырмалы рәүештә, түбән хаҡҡа аппаратымды, мендәргә кәпрәндәр тегеү өсөн материалдарымды, үҙемдең кәрәк-ярағымды тейәп, мин теләгән районға алып барып ҡалдырып киттеләр. Бына мин район үҙәгендә. Бөтөн районда тик ике генә кешене беләм. Шуларҙың береһендә туҡталдым үҙемә йәшәр һәм эшләр өсөн урын тапҡансы.

Өфөләге дуҫтарым минең шулай ҡапыл ғына ҡалҡынып, улар күреп тә белмәгән районға сығып китеүемде аңламаны. Әле булһа аңламайҙар. Улар күҙендә бит мин һәйбәт ерҙә эшләп йөрөгән, йәшәр урыны булған кеше. Барыһы ла мине гел генә йөҙөнән йылмайыу китмәгән, бар һорау-үтенестәрҙе хәл иткән, бошмаҫ бер әҙәм итеп белә бит. Ысынында, был бары тик тышҡы ҡабырсаҡ ҡына булыуын улар белмәне. Һәм белмәйәсәк тә... Үҙҙәренең дә хәлдәре шул тирә. Эш хаҡынан эш хаҡына тиклем өҙә-йырта аҡса еткерәләр, ниндәйҙер әйбер алыр алдынан йөҙ ҡат уйлайҙар, бер концертҡа барып ял итеп ҡайтһалар, ярты йыл был бәхетте телевизор экраны аша ғына күҙәтәләр.

Әммә миңә үҙ көсөмдө, сыҙамлығымды һынап ҡарау мөһим. Ауырлыҡтар алдында бөгөлөп төшмәҫменме, килеп тыуған проблемаларҙы ниндәй юҫыҡта хәл итермен, әллә бөтөнләй хәл итә алмаҫмынмы? Алдыма алған маҡсаттан ситкә тайпылмаҫмынмы? Ошоларҙың барыһын да күҙ уңында тотоп килеп сыҡтым мин үҙем өсөн бөтөнләй ҙә ят булған районға.

Шулай итеп, артабан киттек. Эш башларҙай урын, ул урынды минең эшемә ярашлы итеп эшләп алыуы әллә күпме ваҡытты алды. Бер көндә генә түгел, бер аҙнала ла хәл ителмәне был һорау. Минең бәхеткәлер инде, юлымда ярҙам ҡулы һуҙырға әҙер тороусы кешеләр осрап торҙо. Быныҡ бар эштәре ал да гөл барған икән, тип уйларға ашыҡмағыҙ, юлымдан кире бороргә теләүселәр ҙә булманы түгел. Ләкин ундай кешеләргә иғтибарыңды күп бүлһәң, үрҙәргә артылыуы ҡыйынға төшә. Яныңда яҡшы кешеләр булһа, һинең дә күңел ҡатмай, изгелек, ярҙамсыллыҡ тигән төшөнсәләр ҡайҙалыр китеп юғалмай, ә яман уйлы, ауыр холҡло, боҙоҡ кешеләр янында күберәк өйрәлһәң, һинең дә тап улар кеүек булып китеүеңә күп ваҡыт кәрәкмәй. Сөнки боҙоҡлоҡ, яман уй - ул ауырыу һымаҡ, үҙеңдә уларға ҡаршы иммунитет барлыҡҡа килтермәһәң, тиҙ генә ялмап ала, тормошоңдоң аҫтын-өҫкә килтерә.

Бина эҙләү процесы, әйтеүемсә, оҙағыраҡҡа һуҙылды. Бер урында һыуыҡ, икенсеһендә уты юҡ, өсөнсөһө аҙыҡ-түлек магазины менән бер урында урынлашҡан булыуы менән ираманы, дүртенсеһен үҙәктән алыҫ ерҙә тәкдим иттеләр. Нихәйәт, ираҡлы урын таптым. Халыҡ күп йөрөгән ерҙә, уты ла бар, газы ла, тигәндәй. Алып килдем аппаратымды һәм тектергән кәпрәндәремде.

Эш урынымды әҙерләп бөттөм. Инде иртәгә салонымды асайым да, тиҙерәк эш башлайым, тип торһам, юлымда тағы бер проблема килеп тыуҙы. Ул да булһа, бер ойошманан эш башларға ярай, тигән ныҡымта алырға кәрәк ине. Киттем. Киттем генә түгел, йүгерҙем, остом, сөнки хәҙер атлап ҡына йөрөрлөк ваҡыт та, сарам да ҡалманы. Барҙым, хәлде һөйләнем. Апайым тыңлап ултырҙы-ултырҙы ла "Буш менән булышаһың, һеңлем", - тимәһенме. Һөйләп ултырған ерҙән шып туҡтаным. Былай ҙа ана ҡайырылам, бына ҡайырылам тип торған ҡанаттарым бындай һүҙҙәрҙән һуң бөтөнләй ныпып төшөүҙән саҡ ҡалды. Әйтеп китәйем, ни өсөндөр ошондай һүҙҙәрҙе күп ишетергә тура килә ошо эшкә тотонғаны бирле. Нимә был: был эште алып барып сығара алыуыма ышанмаумы, әллә үҙ эшемде асырға йөрьәт итеүемә көнсөллөк тойғомо, әллә улар ысынлап та шулай уйлайҙармы?..

Шуға күрә, дуҫтарым, шуны әйткем килә. Тыңламағыҙ һеҙ ундай кешеләрҙе. Һеҙҙе был юлдан тайпылдырырға әҙер кешеләр күп буласағын да күҙ уңынан ысҡындырмағыҙ. Йөрәгегеҙҙе үҙ көсөгөҙгә ышанмау тойғоһо биләүенә юл ҡуймағыҙ.

Мин бындай һүҙҙәргә әҙер инем инде. Шуға күрә лә иғтибар итеп торманым, һығымта алыр өсөн ни кәрәклеге хаҡында һораным да сығып киттем. Ҡулда тағы ла исемлек. Тағы ла ниндәйҙер ҡағыҙҙар йыйырға кәрәк булып сыҡты, медицина тикшереүе үтергә лә кәрәк ине. Уныһы ла түләүле, медицина китабы ла түләүле. Йүгерҙем дауаханаға. Ә ундағы сиратты үҙегеҙ беләһегеҙ. Сиратһыҙ үтергә, йә булмаһа мисәт кенә ҡуйҙырып алырға таныш

апайҙар ҙа, ағайҙар ҙа юҡ. Ҡыҫҡаһы, ҡайһы ерҙә үҙемдең сослоғом, ҡайһы ерҙә, нимәһен йәшерергә, шоколад-маҙар биреп, ике көн тигәндә "Эшкә яраҡлы" тигән һүҙҙәр яҙылып, мисәт менән нығытылған медицина китабы минең ҡулда ине. Сиратта ултырырға тура килгәндә лә ваҡытымды файҙалы үткәрергә тырыштым. Бизнестың этәргес көсө реклама икәнлеген күҙ уңында тотоп, асыласаҡ эшем тураһында һөйләнем сиратта ултырыусыларға. Кемдер ҡыҙыҡһыныу менән тыңланы, кемдер көләмһөрәп ҡуйҙы. Иң мөһиме бит кемдеңдер ҡолағына төшөрөү. Улар туғандарына, туғандары дуҫтарына һөйләйәсәк.

Шулай итеп, кәрәкле ҡағыҙҙар алыуға тағы ла ике көнөм китте.Шәхси эшкыуар булыуымды күрһәткән ҡағыҙ алыуыма инде ай ярым ваҡыт үтте, һалымдар китеп бара, ә мин һаман эшемде башламағанмын. Эйе-эйе, ҡулыңа шундай ҡағыҙ алдың икән, һинең эшең башланғанмы, юҡмы икәнлеген ҡарап тормайҙар, һалымдар үҙ яйы менән тамып бара.

Ниһәйәт, салонымды астым. Гәзиткә иғлан бирҙем дә түҙемһеҙлек менән беренсе клиентымды көтә башланым. Бер көн уҙҙы, икенсеһе, ә мендәр килтереүселәр күренмәне. Беренсе аҙна уҙып бара, ә инеп, хеҙмәт күрһәтеүҙең хаҡы менән ҡыҙыҡһыныусыларҙан башҡа кеше юҡ. Уныһы өсөн дә рәхмәт инде, ҡыҙыҡһыныусылар бар икән, тимәк, юҡ менән булышмайым. Шулай йыуатам үҙемде. Икенсе аҙна ла үтеп, минең дә ҡаҡшамаҫ нервылар һуңғы сиккә етеп барғанда, ишектән бер мендәр тотҡан апай килеп инде. Мин уны туғанымды күргәндәй шатланып ҡаршы алдым. Ул үҙ йомоштары менән йөрөп килгәнсе, яңы кәпрәнле, йомшаҡ, күпереп торған мендәре әҙер ине инде. Апайым бик риза булып ҡайтып китте. Ошо көндән алып эш башланды. Кемдер берәр генә мендәр килтерһә, кемдер унарын бер юлы килтерҙе. Берәүҙәр таҙартып ҡына алһа, икенселәр үҙҙәре ҡарап үҫтергән ҡаҙ, өйрәк йөндәренән мендәр эшләтеп алды. Бер апайым хатта минең эштән бик ҡәнәғәт булып, ҡыҙының туй тантанаһына ла саҡырҙы. Ҡыҙына бирнәлек эшләткән икән дә.

Шулай итеп, эштәрем яйға һалына башланы. Район үҙәгенән ситтәрәк ятҡан ауылдарҙан шылтыратып, тағы ла берәй ауылда ошондай уҡ салон асыуымды һораусылар булды. Минең дә ошондай фекер бар. Башҡа ауылдарҙа ғына түгел, ә башҡа райондарҙа ла ошондай уҡ эш асыу теләге көслө. Әммә ләкин теләк менән генә бер ни ҙә эшләп булмай шул. Быныҡ өсөн әлеге лә баяғы аҡса кәрәк. Ә аҡса юҡ. Дөрөҫ аңлағыҙ: тағы ла ошондай уҡ салон асырлыҡ аҡса юҡ әлегә, тиеүем. Барлыҡ эшләгән аҡсамды дуҫыма бурысымды ҡайтарыуға тотондом.

Икенсе салон асыу өсөн аҡса табыу уйҙары менән тағы ла баш ҡатырып йөрөгәндә Хөкүмәтебеҙ тарафынан бәләкәй һәм урта эшҡыуарҙарға дәүләт ярҙамы күрһәтелеүе хаҡында ишеттем. Ныу ҡолаҡ та инде үҙемдә, кәрәкле мәғлүмәтте ишетеп кенә торам. Бына бит! Әгәр ҙә ошо ярҙамды ала алһам, тағы ла бер-нисә районда ошондай уҡ хеҙмәт күрһәтә аласаҡмын! Ошо фекерҙәрем менән янымда эшләгән бер эшҡыуар менән бүлештем. Мине һауанан ергә тиҙ төшөрҙө ул. Үҙем дә аңлап торам, был бәхет меңдәрҙән берәүгә генә эләгәсәк... Ләкин тырышып ҡарарға кәрәк, шунда уҡ ҡул һелтәп ҡуйырға ярамай. Оҙаҡҡа һуҙмай, документтар йыя башланым. Документ йыйыу хәҙер миңә өйрәнелгән эш бит...

Районда кәрәкле ҡағыҙҙарҙы йыйып туплағас, салонда эшләргә кеше ҡалдырып, йәғни кемделер эшле, тимәк, аҡсалы итеп, Өфөгә юлландым. Кәрәкле документтар юллап, байтаҡ йүгерҙем. Бөтә документтарҙы туплап бөтөп, алып барып тапшырып ҡуйҙым. Уңыш һәм бәхет миңә йылмаймай ҡалмаҫ әле, тигән өмөттә көтөп йөрөйөм әлегә.

Бөгөнгө көндә салоным уңышлы ғына эшләп килә. Ә мин ваҡытымды әрәм итмәй, икенсе районда ошондай уҡ эштәр асыу хаҡында һөйләшеүҙәр алып барам. Был ҡуласаны бер тапҡыр үткәс, хәҙер инде еңелерәккә тура килә. Ни тиһәң дә, ҡайҙа барып мөрәжәғәт итергә, ҡайҙан ниндәй әйбер алырға икәнлеген беләм. Ә һеҙгә, хөрмәтле гәзит уҡыусылар, артабан да башҡарған эштәрем хаҡында һөйләп барырға һүҙ бирәм. Эшҡыуарлыҡта аҙ ғына булһа ла тәжрибә туплаған кеше булараҡ, ошо эшкә тотоноргә теләүсе йәштәргә кәңәштәрем дә бар.

Беренсенән, ҡурҡмағыҙ. Әгәр ҙә үҙ эшегеҙҙе асырға уйығыҙ бар икән, оҙаҡҡа һуҙмағыҙ, башлағыҙ. Күп уйлау - философтарға яҡшы, ә беҙгә йәшәргә, ә йәшәр өсөн тырышырға кәрәк.

Икенсенән, мәғлүмәт туплағыҙ. Белмәгәнегеҙҙе һорарға оялмағыҙ. Аңламанығыҙ икән, ҡабатлап һорағыҙ. Тулыһынса аңлап етмәйенсә бер кабинеттан да сығып китмәгеҙ.

Һалым органдарында теркәлеп, ҡулығыҙға эшҡыуар булыуығыҙҙы күрһәткән ҡағыҙ алған көндән үк һеҙҙең хаҡта төрлө ойошмаларға хәбәр ителәсәк. Шуға күрә лә тиҙ арала башҡа дәүләт органдарында ла (Пенсия фонды, Соцстрах, медстрах һ.б.) теркәлергә онотмағыҙ. Оҙаҡҡа һуҙһағыҙ, һеҙҙең өсөкә төрлө штрафтар яуыуы ихтимал.

Ҡайҙа ғына барһағыҙ ҙа һалым органдарында бирелгән документтарҙың төп нөсхәһен һәм бер-нисә күсермәһен алып йөрөгөҙ. Шулай уҡ паспорт һәм башҡа төп документтарығыҙҙың күсермәләре булһын, сөнки улар һәр ерҙә кәрәк, ә урындарҙа һеҙгә берәү ҙә күсермә эшләп ултырмаясаҡ. Портфелегеҙҙә тағы ла таҙа ҡағыҙ биттәре, бер-нисә ручка йөрөтөгөҙ. Аңлап тораһығыҙ, хәҙер кризис һәм бер ойошмала ла артыҡ ҡағыҙ юҡ...

Урындарҙағы йәштәр бүлегенә, иҡтисади бүлектәргә мөрәжәғәт итегеҙ. Беҙҙә "Йәштәр - беҙҙең киләсәк!" тиҙәр, һүҙ менән түгел, ә эш менән иҫбат итһендәр ошо һүҙҙәрҙе. Бөгөнгө көндә йәштәргә, эшҡыуарҙарға бәйле күп төрлө программалар бар. Әгәр ҙә һеҙ үҙегеҙ ҡыҙыҡһыныу белдермәһәгеҙ, берәү ҙә һеҙҙең алға әҙер яуаптар алып килеп һалмаясаҡ. Интернет ярҙам итә, тием, әммә ләкин күп ауылдарҙа ул юҡ кимәлендә. Шуға күрә лә гәзит-журналдарҙы күҙ уңынан ысҡындырмағыҙ, сөнки үҙен ысынлап та донъяуи, файҙалы итеп күргән бер генә гәзит тә, журнал да бындай теманы урап үтмәй.

Эшҡыуарҙар өсөн уҙғарылған йыйылыштарҙан, семинарҙарҙан ситтә ҡалмағыҙ. Үҙегеҙгә кәрәк мәғлүмәтте ишетмәй ҡалмаясаҡһығыҙ. Минең күҙәтеүҙәремдән шул асыҡланды: йәш, үҙ эштәрен яңы асҡандар ниңәлер бындай йыйылыштарҙа ҡатнаша һалып бармай, барған хәлдә лә үҙҙәрен ҡыҙыҡһындырған һорауҙарын бирергә ашыҡмай. Күберәген электән эшләгән, инде ныҡлап аяҡҡа баҫҡан эшҡыуырҙар сығыш яһай, һорауҙар яуҙыра, үҙҙәренекен талап итә белә. Бәлки, һеҙҙең һорауҙар уларҙа көләмһөрәү ҙә тыуҙырыр, оялмағыҙ, берәү ҙә белеп тыумай.

Әйтеүемсә, күп йөрөргә, күп кенә ишектәрҙе ҡағырға тура килә миңә хәҙер. Ошондай саҡтарҙа райондарҙа булһынмы ул, Өфөлә булһынмы, ишекте асып инергә баҙап торған үҙебеҙҙең милләт йәштәрен йыш күҙәтәм. Ниҙән ҡурҡаһығыҙ, нимәнән оялаһығыҙ һуң, тип һорағы килә. Урыҫ телен яҡшы белмәйбеҙ, тип борсолаһығыҙ икән, инегеҙ ҙә башҡортса һөйләгеҙ, һорағыҙ. Бөтөн кабинеттағы биш кеше араһынан берәүһе аңлаясаҡ бит барыбер. Әгәр ҙә хата әйтербеҙ тип оялаһығыҙ икән, быныһы инде бөтөнләй килешмәгән эш, сөнки урыҫ теле беҙгә туған тел түгел, берәү ҙә бит урыҫ йә башҡа милләт вәкиленең башҡорт телен белмәүенә аптырамай, көлмәй. Үҙ теленде белмәү, белеп тә белмәмешкә һалышыу - бына нимә оят булырға тейеш.

Етеҙлек етешмәй беҙгә. Ни өсөндөр бөгөн эшләй алырҙай эште иртәгәгә, унан ҡалһа, тағы ла оҙағыраҡҡа һуҙырға күнеккәнбеҙ. Шулай уҡ уҫалыраҡ булыу мөһим, киреһенсә була ҡалһа, һинең урыныңды алырға, һиңә тәғәйенләнгән әйберҙе ҡулға төшөрөргә лә күп һорамайҙар. Маңлайыңа ни яҙылған - шуны күрәһең, тиҙәр. Минеңсә, һәр кем маңлайына үҙ яҙмышын үҙе яҙа һәм уның үҙенән тора киләсәк тормошо, яҙмышы ниндәй кимәлдә булыры. Киләсәккә нигеҙ бөгөн һинең тарафтан һалына, замандаш, шуны онотма.

Гөлназ САФУАНОВА.

(Аҙағы. Башы 21-се һанда.)

Беренсенән, ҡурҡмағыҙ. Әгәр ҙә үҙ эшегеҙҙе асырға уйығыҙ бар икән, оҙаҡҡа һуҙмағыҙ, башлағыҙ. Күп уйлау - философтарға яҡшы, ә беҙгә йәшәргә, ә йәшәр өсөн тырышырға кәрәк. Икенсенән, мәғлүмәт туплағыҙ. Белмәгәнегеҙҙе һорарға оялмағыҙ. Аңламанығыҙ икән, ҡабатлап һорағыҙ. Тулыһынса аңлап етмәйенсә бер кабинеттан да сығып китмәгеҙ. Һалым органдарында теркәлеп, ҡулығыҙға эшҡыуар булыуығыҙҙы күрһәткән ҡағыҙ алған көндән үк һеҙҙең хаҡта төрлө ойошмаларға хәбәр ителәсәк. Шуға күрә лә тиҙ арала башҡа дәүләт органдарында ла (Пенсия фонды, Соцстрах, медстрах һ.б.) теркәлергә онотмағыҙ. Оҙаҡҡа һуҙһағыҙ, һеҙҙең өсөкә төрлө штрафтар яуыуы ихтимал.

УҢЫШ ҠАҘАН

ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

Һәйбәт булыу күпкә мөһимерәк

"Даллас" сериалынан Дж.Р.Эвинг тигән телевизион герой мөһим кеше булырға ынтылған типик образды сағылдыра. Уның өсөн был тормош уйынында нимә теләһә, шуға эйә булыу - төп ҡағиҙә. Үҙе ҡулланған бер алым да уның өсөн насар йәки ғәҙелһеҙ һаналмай, ул маҡсатына өлгәшер өсөн алдашыуға ла, урлашыуға ла бара. Дж.Р.Эвинг "яҡшы егеттәр финишҡа иң аҙаҡҡы килә" тигән теорияға инанып эйәреүсе. Үҙен мөһим персона итеп иҫәпләп, ул барыһын да үҙенсә эшләй. Дж.Р.Эвинг урам хулигандары шайкаһы башлығының классик образы: һәр кем уның ҡурайына бейей, сөнки уға ҡырын эшләп ҡуйыуҙан ҡурҡалар. Ошо рәүешле үҙ-үҙенә инанып, ул бик күп дошмандар туплай. Улар иһә һәр ваҡыт Эвинг менән иҫәп теүәлләү өсөн уңайлы осраҡ көтөп, уны ҡыуаҡ артында һағалай.

Беҙҙең тормошобоҙ уйҙарыбыҙ һәм инаныстарыбыҙ образынан туҡылған. Әгәр беҙ, яҡшы егеттәр финишҡа иң аҙаҡтан килә, тип иҫәпләйбеҙ икән, был инанысҡа ярашлы йәшәйәсәкбеҙ. Әгәр ҙә, тормошта алға барыу өсөн алдашыуға һәм урлашыуға барырға тейешбеҙ, тип иҫәпләйбеҙ икән, ул саҡта шулай уҡ Дж.Р.Эвинг кеүек күп дошмандар туплаясаҡбыҙ. Әгәр ҙә беҙ яҡшы кеше булыу урынына мөһим булыуға өҫтөнлөк бирәбеҙ икән, бер ниндәй ҙә аҙым беҙҙең өсөн намыҫһыҙ булмаясаҡ. Дж.Р.Эвинг кеүек, теләгән әйберебеҙҙе алыу өсөн өҙөп, барыһын да йолҡоп барасаҡбыҙ. Шуға ла беҙҙең тормош туҡымабыҙ серек ептәрҙән туҡыласаҡ һәм был еп һис көтмәгәндә өҙөләсәк.

Әгәр беҙ урам хулигандарының башлығы булырға ынтылабыҙ икән, бүтәндәр беҙгә йәки эштәребеҙгә ышанған өсөн түгел, ә беҙгә ҡаршы килергә ҡурҡҡан өсөн генә теләктәребеҙҙе үтәйәсәк. Был юлға баҫып беҙ тормошобоҙҙо ҡаҡшаған нигеҙгә төҙәйәсәкбеҙ. Һәр ваҡыт беҙҙе хата аҙым яһарға мәжбүр итеү осрағын көтөп тороусы кемдер табыласаҡ. Урам хулиганы урынын тағы ла яуызыраҡ хулиган яулағансы, йә булмаһа үҙенең характерын яҡшы яҡҡа үҙгәрткәндә генә теләгәненә өлгәшә аласағын аңлаһа, беренсе булып ҡаласаҡ.

Әгәр беҙ бүтәндәргә яҡшы мөнәсәбәттә булыуҙың ни тиклем мөһим икәнлеген төшөнһәк, беҙҙең тормош ни тиклем ыңғай яҡҡа үҙгәрер ине. Бындай кеше һәр ваҡыт алтын ҡағиҙәгә ярашлы эш итә. Ул түбәндәге принципҡа таяна: "Улар һиңә изгелек эшләгәнгә тиклем һин уларға эшләргә өлгөр", унан һуң: "Һиңә нимә эшләүҙәрен теләһәң, бүтәндәр өсөн шуны эшлә", тигән аҡылды ҡуллана. Был кеше бер ниндәй ҙә яуап әҙерен көтмәйенсә, бөтә кешеләргә ҡарата ла ихлас, иғтибарлы, яратыусан, ғәҙел һәм асыҡ күңелле булыуҙың ҡиммәтен күрә белә. Уның өсөн әһәмиәтле күренергә теләп, телләшеүгә, алдашыуға йәки урлашыуға барыу хас түгел. Бындай кеше "Ни сәсһәң, шуны урырһың" тигән төп тормош ҡанунын белә.

Мөһим булыу яҡшы, әммә яҡшы булыу күпкә мөһимерәк. Был фәлсәфәгә таянып, беҙ бөтә булған яҡшылыҡтарҙы килтереүсе бумеранг һөҙөмтәһенә өлгәшәбеҙ. Кешегә нимә эшләһәк, шул беҙгә кире әйләнеп ҡайта. Беҙ эргә-тирәләге кешеләребеҙгә хәстәрлек күрһәтеп, тормошобоҙҙо алтын ептәрҙән туҡый алабыҙ, шул саҡта ул ысын мәғәнәгә эйә буласаҡ.

Джон Макс ТЕМПЛТОН.



31 МАЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять, простить"
15.00 Новости (с субтитрами)
15.20 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости (с субтитрами)
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Жди меня"
21.00 Время
21.30 "Ермоловы", 13-я серия. Сериал
22.30 "Московская сага", 1-я серия. Сериал
23.30 "Познер". Ток-шоу
00.30 "Ночные новости"
00.50 "Калифрения"
01.20 "Отель "Вавилон"
02.20, 03.05 "Тринадцатый этаж"
03.00 Новости
04.10 "Петля-2"

РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Королева тигров. Маргарита Назарова"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Богатая и любимая"
12.45 "Путейцы"
13.40, 04.40 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Тайны следствия". Сериал
16.30 "Кулагин и партнеры". Сериал
17.00 "Вести"
17.15 "Вести-Башкортостан"
17.35 "Дворик", 63-я серия. Сериал
18.05 "Ефросинья", 72-я серия. Сериал
19.00 "Слово женщине", 92-я серия. Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Застывшие депеши", 9-я и 10-я серии. Сериал
22.55 "Неистовый Ролан". Док. фильм
23.50 "Вести+"
00.10 "Кулагин и партнеры"
00.40 "Хочу жить!"
01.45 "Это я"
03.40 "Королева тигров. Маргарита Назарова"

НТВ
05.40 "Государственная граница". "Восточный рубеж"
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "Кулинарный поединок"
09.30 "Чрезвычайное происшествие. Обзор за неделю"
10.00, 13.00, 16.00 "Сегодня"
10.20 "Средний класс"
11.00 "Вернуть на доследование"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Адвокат". Сериал
14.30 "Знаки судьбы". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00, 23.15 "Сегодня"
19.30 "Дикий". Сериал
21.30 "Час Волкова". Сериал
23.35 "Честный понедельник"
00.25 "Школа злословия"
01.15 "Роковой день"
01.45 "Школьные джунгли"
04.00 "Мужчины в большом городе"

БСТ
07.00 "Салям"
09.00 "Ватан. События недели"
10.05 "Полезные новости"
10.15 "Виктория"
11.00 Новости (на русск. яз.)
11.15 Фильм-детям
13.00 Новости (на башк. яз.)
13.15 "Музыка на канале"
13.30 "Историческая среда"
14.00 "Хорошее настроение"
15.00 Новости (на русск. яз.)
15.15 Художественый фильм
17.05 Мультфильм
17.15 "Виктория"
18.05 "Любимые мелодии"
18.40 "Родословная малой Родины"
19.00 Новости (на башк. яз.)
19.30 "На своей земле". Ермекеевскому району - 75 лет
20.15 "Сэнгелдэк"
20.30 "Точка зрения"
21.00 "Деловой форум"
21.30 Новости (на русск.яз.)
22.00 "Спортивный интерес"
22.30 Новости (на башк. яз.)
23.05 Художественный фильм. По окончании: погода

1 ИЮНЯ ВТОРНИК
ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять, простить"
15.00 Новости (с субтитрами)
15.20 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости (с субтитрами)
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 Пусть говорят"
21.00 Время
21.30 "Ермоловы", 14-я серия. Сериал
22.30 "Московская сага", 2-я серия
23.30 "Кремль-9. Мой друг Леонид Ильич..." Док. фильм
00.30 "Ночные новости"
00.50 "Калифрения"
01.20 "Отель Вавилон"
02.20, 03.05 "Прерванная жизнь"
03.00 Новости

РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "О самом главном"
11.00, 14.00, 17.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Богатая и любимая"
12.45 "Путейцы"
13.40, 04.40 "Вести. Дежурная часть"
